*Һеҙ көноҙоно ни тураһында уйлаһағыҙ, уйығыҙҙағы образға оҡшай барасаҡһығыҙ. Әгәр ҙә: "Мин ҡарт инде, мин тормоштан арыным", - тип уйлайһығыҙ икән, был мантра бик тиҙ ысынбарлыҡҡа әйләнәсәк. Әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙҙе хәлһеҙ һәм бер ниндәй ижадҡа, яңы эштәргә һәләтһеҙ тип иҫәпләһәгеҙ, был да һеҙҙең донъяның айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнәсәк. Әгәр ҙә инде: "Мин йәш, сәләмәт һәм йәшәү көсө ташып тора", - тип әйтһәгеҙ, тормошоғоҙ ысынлап та үҙгәрәсәк. Һүҙҙәрҙә оло көс ята.*

**Робин ШАРМА.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 МАРТ (БУРАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №12 (378)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Нанотехнологиямы?**

Ул башҡортса "нәнәй әйбер етештереү" була



2

**Ҡоролтай милләт киләсәген ҡора,**

йәки Йәмәғәт ойошмаһының абруйы һәм статусы тураһында



3,8-9

**Тәнәйҙәргә тәғәйен тәрбиә**



6

**Юғары уҡыу йортона...**

беҙҙең әҙерлек аша барһаң, уңырһың



15

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Совет заманында милли кадрҙар тәрбиәләү, етәксе урындарҙа уларҙың нисбәтен күҙәтеү сәйәсәте алып барылды, әммә хәҙер бындай сәйәсәт юҡ кимәлендә, шуға ла башҡорт етәкселәре бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Бының сәбәбе нимәлә?

*Әхтәр БОҪҠОНОВ:* Совет системаһында милли кадрҙар әҙерләү мәсьәләһендә ыңғай күренештәр ҙә булды. Әүҙем, артынан башҡаларҙы эйәртә алырҙай кешеләр тәүҙә вожатый, комсомол секретары, һуңынан обком секретары булып китте. Ундайҙарҙы уҡытыу яйын да таптылар. Улар гел күҙәтеү аҫтында булды, хужалыҡта етәксе булып эшләгәндән һуң, юғары партия мәктәбендә белем алды. Уртаса алғанда, 40 йәшкә етеүгә ул кеше өлгөрөп еткән кадрға әүерелә ине. Бөгөн был система юҡ һәм шуның арҡаһында власҡа кешеләр икенсе юлдар менән килә, әйтәйек, кемдер үҙе белгән кешеһен килтерә. Был объектив процесс һәм кемделер ғәйепләп тә булмай, сөнки вазифа биләгән һәр кем ышанған кешеһенә таянырға тырыша. Власҡа үҙең менән кадрҙар алып килеү электән, шул иҫәптән, сит илдә лә бар. Кадрҙар әҙерләүҙең элекке системаһы булмау сәбәпле, йыш ҡына, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, республикаға ҡаршы булған кешеләрҙе үҫтерәбеҙ, улар Дәүләт Думаһына, федераль министрлыҡтарға үрләп, республикаға зыян килтереүе лә ихтимал.

*Артур МАНСУРОВ:* Башҡорт кешеһенә карьера эшләүгә ынтылыш хас түгел. Был элек-электән шулай булған һәм бөгөнгө көндә етәксе урындарҙа башҡорттарҙың күп булмауы ошонон менән дә бәйлелер. Башҡорт кешеһе бер ишектән бороп сығарһалар, икенсеһенә инмәй. Минеңсә, бөгөнгө көндә карьера эшләү маҡсаты булған йәш кеше атай-олатайҙарыбыҙҙың ошондай менталитетынан ситкәрәк китергә тейеш. Карьера өсөн еңеп сыға алмаҫлыҡ ҡаршылыҡтар юҡ, тик бының өсөн үҙеңә белемлерәк, әүҙемерәк булырға кәрәк. Үҙеңде күрһәтә белһәң, халҡым, милләтем, республикам өсөн файҙа килтерә алам, тип уйлаһаң, ни өсөн һине күрмәҫкә һәм күтәрмәҫкә тейештәр? Совет заманында милли кадрҙарға өҫтөнлөк биреү сәйәсәте, уларҙы әҙерләү системаһы, бәлки, иң яҡшы система булғандыр, әммә бөгөн кадрҙар тәрбиәләүҙә икенсе, яңы ҡараш кәрәк. Иң мөһиме, бында кешенең үҙенең теләге булһын, ә ата-әсәһенең йәки туғандарыныҡы түгел.

*Әмир ҒҮМӘРОВ:* Логика буйынса ҡарағанда, кешеләр араһында юлбашсыларҙың, етәкселәрҙең барлыҡҡа килеүе, формалашыуы тәбиғи ерлектә барырға тейеш һымаҡ. Юғиһә, күп осраҡта шулай ҙа килеп сыға: кресло йәғни биләгән вазифа юғары, ә уны биләүсенең интеллектуаль кимәле түбән. Биләгән вазифаһы менән интеллекты, тәбиғи һәләте тап килмәгән етәксе, оҙайлы йылдар буйы күҙәтеүҙәрем буйынса, йә сабатаһын түргә элә (түрә ролен башҡара), йә эскелеккә һалыша, йә енси аҙғынлыҡ юлына баҫа, йә уғрылыҡта фашлана һ.б. Ә инде совет осоронда милли кадрҙар әҙерләүҙәге ыңғай күренештәргә килгәндә, беҙ әлегә шул инерция буйынса, йәғни шул заманда әҙерләнгән етәкселәрҙең эшмәкәрлеге арҡаһында ғына әҙәмсә йәшәп киләбеҙ һымаҡ. Ҡытлыҡ әле нык һиҙелә башланы. Шулай ҙа, милли кадрҙар нисбәте һаҡланды тиһәк тә, Башҡортостандың 2-3 райком секретарының ғына башҡорт милләтле булған сағын да онотмайыҡ.

## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

Башҡорттарҙы аҙ һанлы халыҡ, тиҙәр. Мин бының менән килешмәйем. Әлбиттә, беҙ күп һанлы халыҡ түгел, уртаса һанлыбыҙ. Әйтәйек, һан буйынса Рәсәйҙә дүртенсе урында торабыҙ икән, был һәйбәт күренеш. 143 миллион халыҡ йәшәгән Рәсәйҙә ике миллионға яҡын башҡорт йәшәүе күп яҡтан ыңғай күренеш. Эргәбеҙҙә йәшәгән урыҫ кешеһе беҙҙең рухи байлыҡҡа көнләшә хатта. Беҙҙең рухи донъябыҙҙан торған ҙур дәүләт кимәлендәге бөтөн яҡтан үҫешкән мәҙәниәтебеҙ бар. Әҙәбиәтебеҙ, музыкабыҙ, фольклорыбыҙ, аҡыл эйәләребеҙ, батырҙарыбыҙ, тарихыбыҙ бар! Һоҡланғыс күренеш түгелме ни? Өҫтәүенә, беҙ урыҫ мәҙәниәтен дә күңелебеҙгә һеңдереп йәшәйбеҙ - барыһы ла беҙҙеке. Эргәбеҙҙәге башҡорт телен аңламағандар был йәһәттән ниндәйҙер кимәлдә беҙгә ҡарағанда ярлыраҡ. Әле мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыта башлау киләсәктә башҡа халыҡтарҙың күңелен байыта торған сара булыр һымаҡ...

**Рәшит ШӘКҮР, шағир, филология фәндәре докторы, профессор.**



**Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты уҡыусыһы Эльвина Харрасова тураһында 5-се биттә уҡығыҙ.**

ИШАРА

# СИТ МӨХИТТЕ... күҙгә элмәйек

**Ҡайһы саҡ Һаҙый Таҡташтың "Тиләләр" шиғырынан "Мин тиләләр донъяһында бер тиле тәҡлә торам..." тигән юлдарҙы иҫкә төшөрәм дә, ҡабатлайым да йөрөйөм...**

Был шиғырҙа хас та әлеге "ҡырағай капитализм" һүрәтләнгән кеүек минә (ә бит ул 1923 йылда яҙылған!). Бына әлеге ваҡытта ла һәләтле кешеләр ситтә йөрөй, хатта бөтөнләй илдән ситкә сығып китә, ә сауҙагәрҙәр, байҙар, улар тирәһендә өйөрәлгәндәр балда, майҙа йөҙә. Ғәжәп, әммә әлеге замандың иң күренекле яҙыусыһы- ул Михаил Жванецкий, имеш! Күптән түгел уның юбилей кисәһен ҙурлап үткәрҙеләр. Ул һөйләгәндәрҙе тыңлап-тыңлап ҡарайым да, телевизорымды һүндерәм. Саҡ ҡына ял итеп алам да, тағы тоҡандырып, бөтә иғтибарымды биреп тыңлап ҡарайым, әммә ахмаҡлыҡтан башҡа бер аҡыллы һүҙ ишетмәйем. Ә зал шығырым тулы... Унда иң билдәле кешеләр ултыра: В.Познер, Мәскәүҙәге А.С.Пушкин исемендәге музей директоры, билдәле артистар, журналистар, олигархтар... Юбилейға килеүсе ул билдәле кешеләрҙе ҡат-ҡат күрһәтәләр. Улар бөтәһе лә көлә, ҡул саба, һоҡлана. Ә мин, нимәгә көләләр, нимәгә һоҡланалар икән, тип аптырайым.

Тағы бер каналда - "Кәкре көҙгө". Ундағы әбей булып кейенгән ирҙәрҙе күреп кенә ҡалһам да, күңелем болғана башлай.

Телевизорымдан тағы бер каналды асам. Унда тағы бер юморист Михаил Задорнов Рәсәй халҡының өҫтөнән көлөп, көлдөрөп маташа. Имеш, ул ғына иң аҡыллы кеше. Бөтә тамашасыларҙың да ауыҙы йырыҡ, ҡул сабып алҡышлайҙар. Ниңә мин уларҙы аңламайым, көлмәйем һуң? Һаҙый Таҡташ яҙғанса, "Мин тиләләр донъяһында бер тиле тәҡлә торам" тип баһаларғамы юғиһә үҙемде?

Эйе, мәғәнәһеҙ көләмәстәрҙе тыңлап, боевик, триллерҙар ҡарап, араҡы эсеп, табель ҡоралын кеҫәһенә тығып, осраған бер кешене атып, үҙен боевиктың бер геройы итеп тойоусы Евсюковҡа, йә бер абхаз ирен урамда тукмап үлтергән өс милиционерға аптырап булмай. Үҙәк телевидение, үҙәк гәзиттәр алдына халыҡты тиләләндереү маҡсаты ҡуйылған икәнлеге көн кеүек асыҡ бит инде. Аңы юғалған халыҡтар иленә әйләнеп бара Рәсәй...

Әлдә үҙебеҙҙең БСТ каналыбыҙ бар әле. Оло йөшкә етһәм дә, "Сулпылар"ҙы, "Байтус"ты, "Сәңгелдәк"те ҡарап һоҡланам, "Байыҡ", "Гәлсәр һандуғас" та күңелде күтәрә. Һәр хәлдә, БСТ каналын ҡарағанда үҙеңде тиле тип тоймайһың. Һоҡланаһың, хисләнәһең. Республикабыҙ гәзиттәрен, журналдарын уҡып барыусылар ҙа үҙҙәрен тиле тип тоймаҫ. Шуға әйтәм: күберәк үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнаһаҡ ҡайнайыҡ, сит мөхиттең яманлыҡтарын күҙебеҙгә элмәйек, күңелебеҙгә индермәйек берүк.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# НАНОТЕХНОЛОГИЯМЫ?



## Ул башҡортса "нәнәй әйбер етештереү" була

**Һуңғы йылдарҙа телебеҙ даирәһенә бер-бер артлы яңынан-яңы һүҙҙәр инеп тора. Әле күптән түгел генә менеджер, лизинг, ипотека, холдинг кеүек һүҙҙәр ятыраҡ һәм сәйерерәк булып яңғыраһа, бөгөн улар телебеҙҙән төшмәй, тиерлек.**

Бына беҙҙә яңыраҡ ишетелә башлаған "нанотехнологиялар" һүҙен дә зыялы халыҡ ихлас ҡабул итте. Владимир Путин 2007 йылда нанотехнологияларға эйә булыуҙың ил киләсәге өсөн бик мөһим булыуын белдерһә, Рәсәйҙең хәҙерге Президенты Дмитрий Медведев 2009 йылдың октябрендә Мәскәүҙә ошо проблемаға арналған Халыҡ-ара форумда сығыш яһап, нанотехнологияларҙы иҡтисадтың ҡеүәтле бер өлкәһенә әйләндереү хаҡында иғлан итте. Итмәҫлек тә түгел шул: Япония, АҠШ кеүек илдәрҙә нанотехнологияларҙы үҫтереү өсөн йыл һайын миллиардлаған доллар сығымдар бүленә.

Нимә ул нанотехнология һәм ни өсөн ул донъя кимәлендә ажиотаж тыуҙыра алды? Фән үҫеше барышында яңылған һуңғы технологик асыштар етештереү өлкәһенә революцион үҙгәрештәр алып килә. Әлегә тиклем сәнәғәттә булһынмы, биология, химия, медицина йәиһә башҡа берәй өлкәләме, етештереү механизмдары, ҡорамалдары һәм эшләп сығарылған барлыҡ әйберҙәр, башлыса, макрообъекттар, йәғни, күҙ менән күреп, ҡул менән тотоп эшләй торған материалдар ҡулланыуға нигеҙләнгәйне. Күрәһең, замандаштарыбыҙға ҙур дәүмәлдәр менән эш иткән макродонъянан гәҙәттән тыш бәләкәй үлсәмле микродонъяла ғына була торған процестар, механизмдар, өр-яңы сифаттарға эйә булған материалдар өҫтөнлөк итәсәк яңы технологиялар заманына күсеү осоронда йәшәү бәхете насип булыр. Ябай ғына итеп әйткәндә, беҙҙең йәшәйешебеҙ өсөн үтә кәрәкле, бик оҙаҡ ваҡыт дауамында ҡулланғандан һуң да сифаты юғалмай торған, әле аҡыл-зиһенебеҙ буйламаған мөмкинлектәр асыусы матдәләрҙе, органик һәм органик булмаған материалдарҙы, әйберҙәрҙе, ҡорал-ҡорамалдарҙы, дарыуҙарҙы, прибор һәм аппараттарҙы, башҡа бихисап күп нәмәләрҙе айырым атом һәм молекулалар менән эш итә алыуға ҡоролған технологиялар ярҙамында етештереү тураһында һүҙ бара хәҙер. Был технологияларҙағы процестар дәүмәле 100-ҙән алып 1 нанометрға тиклемге объекттар менән башҡарыла. Боронғо латин телендә "нанус" һүҙе бик бәләкәй буйлы кеше, йәғни карлик тигәнде аңлатһа, башҡорт телендәге "нәни"ҙең сабый балаға йәиһә бәгзе бәләкәй предметтарға ҡарата ҡулланылыуын беләбеҙ. Ғәйнә һөйләшендәге "нәнәй" һүҙенең күҙ ҡарaһын белдереүе лә тиккә түгелдер ул. Атом-көс микроскобын, йәиһә сканирлаусы зонд микроскобын тап ана шул нанодонъяны күрһәтә алыусы яһалма күҙ ҡараһы сифатында ҡабул итеп була. Шулай булғас, әлеге халыҡ-ара яңы "нано" һүҙе лә беҙгә һис ят түгел икән, үҙебеҙҙең "нәни"ҙең игеҙәге булып сыға бит!

Ә яңылыҡ бына нимәлә: Рәсәйҙә Нанотехнология үҙәктәре селтәре булдырылып, 2015 йылға тиклем ошо маҡсатта файҙаланыу өсөн 318 миллиард һум аҡса бүленәсәк. Ошондай үҙәктәрҙең береһе Өфө ҡалаһында асыласаҡ, уның төп йүнәлеше тәрлө двигателдәрҙе, машина һәм судноларҙы, тәрлө металл конструкцияларҙы газотермик йәиһә ион-плазмалы магнетотрон бөркөү ысулын ҡулланып, үтә йоҡа өҫкө нанобаҡатлам менән "тышлау" буласаҡ. Был ысул ошондай конструкцияларҙың сифатын бермә-бер арттырып, ҡулланыу ваҡытын байтаҡҡа оҙайтасаҡ. Нанотехнология үҙәгенең Өфө дәүләт авиация техник университеты базаһында ойошторолоуы күҙаллана.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2010 йылдың икенсе ярты йыллығына ваҡытынан алда, тәүге ярты йыллыҡ хаҡтары менән гәзитебеҙгә яҙылыу бара. "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына һеҙ март аҙағына тиклем 306 һум 84 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары 282 һум 78 тингә яҙыла алаһығыҙ, апрелдән хаҡтар бер аҙ күтәреләсәк.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһын да дауам итмәксебеҙ.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа унайлы һәм арзанраҡ: ярты йылға - 225 һум.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ ярты йылға 186 һум 60 тингә генә төшәсәк.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыкты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы ҡарамағындағы РФ субъекттары башлыҡтары Советы ултырышында ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Ултырыш РФ сит ил эштәре министры С.В. Лавров етәкселегендә үтте. Сараләғы һөйләшеүҙәр Рәсәй төбәктәренең БМО системаһы халыҡ-ара ойошмалары менән үҙ-ара эш итеүе мәсьәләләренә һәм сит ил граждандарын, сит илдәрҙә йәшәүсе ватандаштарыбыҙҙы Рәсәй юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеүҙе ойоштороу буйынса бурыстарға арналды. Мортаза Ғөбәйҙулла улы иһә БМО системаһы ойошмалары менән үҙ-ара эш итеү тәжрибәһе тураһында һөйләнә.

✔Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ойошторолоуға 15 йыл тула. Башҡортостан парламенты ошо осор эсендә бик ҙур эш башҡарҙы, республикала ныҡлы конституцион гарантиялар һәм абруйлы закондар базаһы булдырыуға өлгәште. Беҙҙең Дәүләт Йыйылышын хәҙер Рәсәйҙә иң һөҙөмтәле эшләүсе төбәк парламенттарының береһе тип таныйҙар.

✔БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда был 29515 бала Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырасаҡ. Рус теленән имтихан тапшырыу өсөн - 29365, математиканан 28863 уҡыусы ғариза биргән. Теләк буйынса һайланған имтихандар араһында иң популяр предметтар - йәмғиәтте өйрәнеү, физика, биология, тарих.

✔Быltыр Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева музейы асылды. Яҙыусы менән аралашҡан, уның тормош, ижад юлына бәйле хәтирәләр, ҡомартҡылар һаҡлаған кешеләрҙең бәйләнешкә сығыуын, музей фондын үҫтереүҙә ҡатнашыуын һорайбыҙ. Беҙҙең адрес: 453103, Стәрлетамаҡ ҡалаһы, Ленин проспекты, 49. Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһына, З. Биишева музейына. Электрон адрес: musbiish@yandex.ru.

✔21 марттан Башҡортостан Бокс федерацияһы спорт залында БР Мәктәп уҡыусылары спартакиадаһы программаһы сиктәрендә бокс буйынса ярыштар башланасаҡ. Унда республика мәктәп-интернаттары, гимназия-интернаттары һәм лицейҙары командалары ҡатнашасаҡ.

✓ *Өлкәндәргә алмашҡа йәш лидерҙар килмәне. Күрәһең, II ҡоролтайҙан һуң йәштәр менән эш алып барыуҙы өҫтөнлөклө мәсьәлә итеп ҡуйыу кәрәк булғандыр.*



# ҠОРОЛТАЙ МИЛЛӘТ КИЛӘСӘГЕН ҠОРА,

## йәки Йәмәғәт ойошмаһының абруйы һәм статусы тураһында

**Бынан 20 йыл элегерәк башланған башҡорт милли хәрәкәтендә баш ҡалабыҙҙа йәшәүсе зыялыларҙың роле ҙур булды. Дөрөҫөн әйткәндә, Башҡортостандың үҙгәреш заманындағы яңы статусы өсөн көрәште баш ҡала башҡорттары башлап ебәрҙе, һәм улар араһынан ошо хәрәкәттең йоғонтоло лидерҙары үҫеп сыҡты. Халҡыбыҙҙың милли үҙаңын уятыу, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереү, милли мәғарифты тергеҙеү уларҙың фиҙакәр эшмәкәрлегенән башҡа мөмкин дә булмаҫ ине. Гәзитебеҙҙең III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған милләттәштәр ҡоронда Өфө ҡала округы райондары башҡорттарының ҡоролтай рәйестәре Риф ИҪӘНОВ, Мирхәт ҠАҘАРҒОЛОВ, Ғәли ВӘЛИУЛЛИН, Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, Айрат ИСКӘНДӘРОВ, Наилә БУРАНҒОЛОВА һәм Мәрфуға МОСТАФИНА ҡатнашты.**

▶ **Милли әүҙемлек йәһәтенән хәҙерге осорҙо 90-сы йылдар менән сағыштырырлыҡ та түгел. Йәмәғәтселек хәрәкәте хәҙер күпкә һүлпәнәйеп ҡалды, ойошҡанлыҡ етешмәй, тарҡаулыҡ һәм битарафлыҡ көслө. Һуңғы йылдарҙа милли хәрәкәттә яңы лидерҙар күренмәй тиерлек. Был юҫыҡта Өфө ҡалаһы райондары башҡорттары ҡоролтайҙары ла халыҡты әллә ни әүҙемләштерә алманы. Әлбиттә, һәр кем бөгөн дә үҙ урынында үҙенә тәғәйен эште башҡара, әммә элекке рухи күтәренкелек тураһында һүҙ алып барырлыҡ түгел. Бындай төшөнкөлөктөң сәбәптәрен нисек аңлатырға була һуң?**

**Риф Иҫәнов:** Мин тәүҙә III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барышында беҙгә уңайһыҙлыҡ тыуҙырған бер мәсьәләне билдәләп китер инем. Райондарҙан ҡоролтайға делегат һайлағанда уның эшләгән урынын түгел, ә ҡайһы районда йәшәүен иҫәпкә алалар. Ә ҡала башҡорттары йәмәғәтселек эшен башлыса үҙҙәре ҡайҙа эшләй, шунда алып бара. Шул арҡала беҙ үҙебеҙҙең иң әүҙем шәхестәребеҙҙе райондан делегат итеп һайлай алмайбыҙ. Мәҫәлән, Калинин районының башҡорт гимназияһы директоры беҙҙең районда йәшәмәгәс, районыбыҙҙан делегат булып һайлана алмаясаҡ. Ошо мәсьәләне хәл иткәндә, беҙҙең менән дә кәңәшләшергә тейеш инеләр бит. Йәмәғәт эшмәкәрлегенән ситләшмәгән әүҙем шәхестәребеҙ делегаттар исемлегендә булмаһа, киләсәктә ойошмаларыбыҙ кимәлен күтәрергә теләү һүҙҙә генә ҡаласаҡ.

Йәмәғәтселектең сәйәси яҡтан һүлпәнәйә биреүенең билдәле сәбәптәре бар. Өфө ҡалаһының Калинин районында башҡорттарҙың милли ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү тураһында аныҡ ғәмәлдәр түгел, һүҙ ҙә булмаған ваҡыттар бар ине. Бөгөн бында ике башҡорт гимназияһы, бер балалар баҡсаһы, башҡа балалар баҡсаларында 27 башҡорт төркөмө булдырылған. Уҙған йылдарҙа милләтебеҙ мәнфәғәттәрендә тейешле закондар ҡабул ителде, байтаҡ ғәмәли эштәр башҡарылды. Һөҙөмтәлә күптәр, элек ҡуйылған маҡсаттарыбыҙға өлгәштек инде, тип, тынысланып ҡалды. Быныһын хөкүмәт ҡайғыртһын, тегеһен хакимиәт хәл итһен, балаларҙы мәктәп тәрбиәләһен, мәҙәни эштәрҙе мәҙәниәт бүлектәре ойоштороһон, тип фекерләү өҫтөнлөк итә. Шәжәрә байрамдарына, башҡа мәҙәни һәм ижтимағи-сәйәси сараларға саҡырған хәлдә лә, йөрөмәүселәр күп. Замандаштарыбыҙҙың күңел торошон 90-сы йылдар менән сағыштырһаҡ, битарафлыҡ һаҙлығына батып барыуыбыҙ күренә. Элек әүҙем булып та, бөгөн һүнеп ҡалғандар күп. Буласаҡ делегаттарҙың кандидатуралары хаҡында һүҙ барғанда, улар: "Төп маҡсатыбыҙға өлгәштек бит, хәҙер заман да, сәйәсәт тә үҙгәрҙе, артабан әллә ни ҡырып булмаясаҡ", - тип барыһынан да ваз кисеүҙе хуш күрә.

Минеңсә, битарафлыҡтан сығыу юлын яңы сәйәси маҡсаттар ҡуйыу аша табып буласаҡ. Беҙ бөгөн ни өсөн Башҡортостан суверенитеты тураһындағы декларациялағы төп принциптарыбыҙ өсөн көрәшмәйбеҙ? Йәмәғәтселек республикабыҙҙың сәйәси статусын нығытыу һәм уның өсөн көрәш алып барыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйырға тейеш. Йәмәғәт ойошмалары халыҡ мәнфәғәттәрен, милли ихтыяждарыбыҙҙы һәм хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау һәм һаҡлау өсөн кәрәк. Халыҡ-ара ҡанундар милли ойошмаларҙы баҫтырып тотоусыларҙы яҡламай, ә аҙсылыҡты тәшкил иткән милләттәр законлы талаптарының үтәлеүе өсөн үҙҙәре әүҙемлек күрһәтергә тейеш. Шундай сәйәси маҡсаттар ҡуймаһаҡ, беҙ халҡыбыҙҙы ҡуҙғата алмаясаҡбыҙ.

**Шәмсулла Хәбибрахманов:** Һуңғы 20 йылда йәмәғәт эштәрендә 80-90-сы йылдарҙа ҡалҡып сыҡҡан лидерҙар өҫтөнлөк итте. Тик шуныһы: йәшәйештә быуындар алмашыныу процесы ваҡытында башланмаһа, торғонлоҡ барлыҡҡа киләсәк. Йәмәғәтселек менән дә шул уҡ хәл килеп тыуҙы, сөнки өлкәндәргә алмашҡа йәш лидерҙар килмәне. Күрәһең, II ҡоролтайҙан һуң йәштәр менән эш алып барыуҙы өҫтөнлөклө мәсьәлә итеп ҡуйыу кәрәк булғандыр. Алдағы ҡоролтайҙа йәш делегаттарҙың һаны 30 проценттан да кәм булмаҫҡа тейешлеге йәмәғәтселек эшмәкәрлегенең тап ошо йүнәлешен алға сығарыуҙы талап итә. Хәҙер Өфөлә йәмәғәт эштәренә битараф булмаған йәштәр аҙ түгел, тик уларҙы ваҡытында иғтибар үҙәгенә алып, эштәрендә, карьераларында уларға ярҙам итә алыу мөмкинлеген табырға кәрәк. Йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып йөрөгән йәштәребеҙҙе күтәрә алһаҡ, улар үҙҙәре башҡалар өсөн өлгө буласаҡ: әүҙем йәмәғәтсе булған кешене беҙҙә өҫтөнөрәк күрәләр, тигән фекер таралыр ине йәштәр араһында.

Ғөмүмән, буласаҡ лидерҙарҙы балалар баҡсаһынан уҡ тәрбиәләй башлау фарыз. Бәләкәйҙән үк үҙ телендә аралашып, үҙенең милләттәш тиҫтерҙәре араһында үҫмәгән балаларҙан милли лидерҙар сыҡмаясаҡ. Ә бөгөн ҡала башҡорттары балаларының күбеһе, балалар баҡсаларындағы башҡорт төркөмдәрендә урын булмау сәбәпле, коллективта алып барылған милли тәрбиәнән мәхрүм ҡала. Мәҫәлән, Сипайловолағы 308-се башҡорт балалар баҡсаһында балалар шул тиклем күп, талап ителгән нормативтарҙы бер нисек тә үтәп булмай. Ясли төркөмөндә 15 бала булырға тейеш, ә исемлектә 42 бала теркәлгән. Бөтәһе лә бер юлы килгән хәлдә, уларҙы һыйҙырып та булмаҫ ине.

Әлбиттә, башҡа йүнәлештәрҙә лә тейешенсә хәл ителмәгән проблемалар бар. Бына башҡорт телен туған тел сифатында ла, дәүләт теле булараҡ та уҡытыу яйға һалынды, һәм был бик һәйбәт ҡаҙаныш. Шул уҡ ваҡытта уҡытыуҙың сифатын күтәреү өсөн бик күп көс һәм тырышлыҡ һалыу кәрәк буласаҡ. Белем биреүҙең төбәк компоненты тураһында башлыса ямаңаты сыҡҡан 309-сы Федераль закон менән генә бәйләп һөйләү ғәҙәтебеҙгә инде. Ә Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте, географияһы буйынса һаман да 15-20 йыл элек яҙылған, хәҙерге заман талаптарына яуап бирмәгән уҡыу әсбаптары менән эшләйбеҙ. Бөгөн ул дәреслектәр ныҡ үҙгәргән уҡыу пландарына бер нисек тә тура килмәй. Башҡортостан тарихы буйынса ашығыс рәүештә яҙылған әсбаптар уҡыусыларыбыҙҙың үҙенсәлектәрен, аң мөмкинлектәрен иҫәпкә алмай, һәм уҡытыусыға улар менән эш итеүе бик ҡыйын. Башҡорт йәмәғәтселеге ошо мәсьәләне лә милли мәғариф өлкәһендә торған өҫтөнлөклө бурыс итеп ҡараһын ине, һәм уны тиҙерәк хәл итеү хаҡындағы талапты мәғариф етәкселегенә мотлаҡ еткерергә кәрәк.

**Айрат Искәндәров:** Һеҙ ҡуҙғатҡан проблеманы ике юҫыҡтан тороп баһаларға һәм хәл итеү юлдарын асыҡларға була. I һәм II Бөтә донъя ҡоролтайҙары тарафынан ҡабул ителгән ҡарарҙың күбеһе ғәмәлгә ашырылды. Хәҙер беҙҙең төрлө кимәлдәге милли баҫмаларыбыҙ күбәйҙе, йәштәр, балалар өсөн айырым гәзит-журналдарыбыҙ даими сыға,милли радио һәм телевидениебыҙ ҙур мөмкинлектәргә эйә, башҡорт телен уҡытыуға, мәктәптә эшләгән милли кадрҙарға иғтибар бермә-бер артты, мәктәп директорҙарының туған телдәр буйынса урынбаҫарҙары вазифаһы булдырылды. Ғөмүмән, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәләрендәге үҫеште бер кем дә инҡар итмәйәсәк. Әммә шул ҡаҙаныштар һөҙөмтәһендә беҙ нисектер, тынысланып, вайымһыҙланыбыраҡ ҡалдыҡ. Ысынлап та, борсолорға һис урын юҡ кеүек: милли мәғариф, мәҙәниәт буйынса закондар бар, улар тейешенсә үтәлеп килә, Хөкүмәт һәм муниципаль район хакимиәттәре ҡарарҙар ҡабул итә, ойоштороу эштәренә етәкселек итә, мәҙәни саралар, милли байрамдар уҙғарылып тора. Мәҫәлән, республикабыҙҙың барса төбәктәрендә БР Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, "Шәжәрә" байрамдары ойошторолдо, был эште ҡоролтайҙар үҙҙәре генә шул тиклем юғары кимәлдә башҡара алмаҫ ине. Әммә төптәнерәк фекер йөрөтһәк, эш һөҙөмтәләренең һәр саҡта ла артыҡ ныҡ ҡәнәғәтләнерлек булмауын күрәсәкбеҙ. Туған телдәр уҡытыла, ә уҡытыу һөҙөмтәләре, уның сифаты күкрәк һуғып маҡтанырлыҡ түгел; гәзит-журналдарыбыҙ күп, ә ни өсөндөр уларға яҙылыусылар аҙайғандан-аҙая бара; телевидениенан күпме фәһемле тапшырыуҙар күрһәтелеп тора, тик уларҙы ҡараусыларҙы бик күптер, тип әйтә алмабыҙ. Тимәк, халҡыбыҙҙың кәрәгенән тыш күңел тыныслығына бирелеүе, шул арҡала милли мәсьәләләребеҙгә вайымһыҙ ҡарауы бөгөн милләтебеҙ үҫеше өсөн кире фактор булып тора. Элегерәк алғы рәттә йөрөгән, милли мәнфәғәттәрҙе күтәргән кешеләр бөгөн урта һәм оло быуынға ҡарай. Иң ҙур етешһеҙлегебеҙ - йәштәрҙе тейешле рәүештә йәмәғәтселек эшенә йәлеп итә алмау. Урындағы ҡоролтайҙарҙың яҡын киләсәктәге төп бурысы - йәштәр менән бергәләп эшләү, олораҡ йәмәғәтселәребеҙгә алмаш булырҙай йәш лидерҙарҙы әҙерләү.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓25 мартта БР Уҡытыусылар съезы М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында һәм БР мәғарифты үҫтереү институтында эш башлай, икенсе көндө съездың пленар өлөшө Конгресс-холда үтә. Съезда 600 кеше делегат булып ҡатнаша. Рәсәй төбәктәренән ҡунаҡтар киләсәк.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында студенттар араһында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -2010" төбәк-ара конкурсы үтте. Университет студенты Гөлшат Һатыбалова еңеүсе тип табылды. Икенсе урынға БДУ студенты Нурзилә Нәҙерғолова, өсөнсө урынға З. Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһынан Гүзәл Ғөбәйҙуллина, Силәбе дәүләт университетынан Әлфиә Камалова сыҡты.

✓1-30 апрелдә республика территорияһы буйлап үткән федераль автомобиль юлдары участкаларында ҙур йөк транспорты йөрөшөнә сикләүҙәр индерелә. Аҙыҡ-түлек, дарыуҙар, яғыулыҡ-майлау материалдары, орлоҡ, тупраҡ һәм стихия ҡазаларына йәки башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәргә юл ҡуймау йәки уларҙың эҙемтәләрен бөтөрөү өсөн кәрәкле йөктәр ташыусы транспорт сараларына был сикләү ҡағылмаясаҡ. Федераль юл агентлығының Һамар - Өфө - Силәбе автомагистрале идаралығы пропускылар биреү менән шөғөлләнә.

✓Нефтселәр мәҙәниәт һарайында йәштәрҙе сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу буйынса сара булып үтте. Сараның ойоштороусыһы һәм әйҙәүсеһе - "Әбйәлил йәштәре" йәмәғәт хәрәкәте. Осрашыуҙа йәштәрҙе эскелектән, бигерәк тә һыра менән мауығыуҙан йолоп ҡалыу тураһында һүҙ барҙы. Программала врачтар ҙа сығыш яһаны, алкоголдең зарары тураһында видеоролик күрһәтелде, викториналар ойошторолдо. Әбйәлил йәштәре бындай сараны Өфөлә икенсе тапҡыр үткәрә, улар был хәрәкәтте дөйөм республика кимәленә сығарырға уйлай.

✓Башҡортостанда тәмәке ҡатышмалары әйләнешен күҙәтеү буйынса ҙур эштәр алып барыла. БР Наркотиктарға ҡаршы контроль идаралығы 1 мартҡа 27 г тәмәке ҡатышмаларын тартып алған, 22 кешегә енәйәт эше ҡуҙғатылған.

## ЕТЕ РАЙОН

**СОВЕТ районында Башҡортостан социаль технологиялар институты янында "Социаль хоҡуҡ һаҡлау" юридик клиникаһы асылды.** Унда аҙ тәьмин ителгән граждандарға юридик консультация бирелә. Уларға юғары квалификациялы уҡытыусылар һәм юғары курс студенттары ярҙамға киләсәк. Консультациялар түбәндәге йүнәлештәр буйынса үткәрелә: граждандыҡ , торлаҡ, хеҙмәт, социаль тәьминиәт, ғаилә, административ, енәйәт хоҡуҡтары. Юридик клиника дүшәмбе, шишәмбе, кесе йома 12.00 сәғәттән 16.00 сәғәткә тиклем эшләй.

**ЛЕНИН районы хакимиәтендә уҙған ултырышта билдәләнеп кителеүенсә, ауыр иҡтисади шарттарға ҡарамаҫтан, районның социаль-иҡтисади күрһәткестәре насар түгел. Былтырғы йыл һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, район буйынса сәнәғәт етештереүе индексы 82,8 процент тәшкил иткән.** Райондың иҡтисади үҫешенә бәләкәй эшҡыуарлыҡ предприятиелары ла ҙур өлөш индерә. Бөгөнгө көндә эшҡыуарҙар районда йәшәүсе халыҡтың 30 процентын эш менән тәьмин итә. Ҡала бюджетына бындай предприятиелар индергән һалым өлөшө 12,5 процент тирәһе.

**КАЛИНИН районының Шаҡша бистәһендә урынлашҡан 28-се балалар-үсмерҙәр спорт мәктәбе базаһында райондың тхэквондо буйынса асыҡ беренселеге үтте.** Ярыштар мәктәп уҡыусылары спартакиадаһының беренсе этабы сиктәрендә үткәрелде. Унда райондың өс спорт мәктәбенән 98 уҡыусы ҡатнашты. Дөйөм команда иҫәбендә беренсе урынға - 28-се спорт мәктәбе, икенсе урынға - 31-се, ә өсөнсө урынға 22-се спорт мәктәбе сыҡты.

**ДИМ районының мәктәпкәсә йәштәге балалар тәрбиәләнгән учреждениелары араһында "Малышок - 2010" ҡышҡы олимпиадаһы үткәрелде. Унда 100-ҙән ашыу бала ҡатнашты.** Балалар өсөн ҡышҡы олимпиада Дим районында быйыл дүртенсе тапҡыр уҙғарыла. Ойоштороусылар әйтеүенсә, бындай саралар үҫеп килеүсе быуынды спортҡа, сәләмәт йәшәү рәүешенә күнектереү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Йәш спортсылар һәр уйында ла ихлас ҡатнашты, уларҙың барыһына ла маҡтау ҡағыҙҙары, миҙалдар һәм татлы бүләктәр тапшырылды.

**ОРДЖОНИКИДЗЕ районында йәш уҡытыусылар араһында конкурс иғлан ителгәйне. Уның төп маҡсаты - был һөнәрҙең баһаһын арттырыу һәм йәш белгестәргә ижади үҫеш өсөн шарттар тыуҙырыу.** Быйыл конкурста эш тәжрибәһе өс йылдан кәм булмаған дүрт уҡытыусы һәм ике тәрбиәсе ҡатнашты. Конкурстың шарттарына ярашлы, бәйге апрель аҙағына тиклем дауам итәсәк.

**КИРОВ районының Аксаков исемендәге 11-се гимназияһында "Науруз гүзәле - 2010" конкурсы уҙҙы. Унда Киров районы мәктәптәре һәм балалар баҡсаларынан 15 уҡытыусы ҡатнашты.** Конкурста ҡатнашыусылар тамашасыларға башҡорт милли аш-һыуын әҙерләп күрһәтте, йырланы, милли костюмдар кейеп, бейеп тә күрһәтте. Гранпризы 5-се лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәлиә Исхаҡова яуланы.

**ОКТЯБРЬ районында "Оло йәштәгеләргә - белем" Халыҡ университеты эшләй.** Был аҙнала "Сәләмәтлек һәм медицина белеме" факультеты деканы Розалия Садиҡова һәм биология фәндәре кандидаты Зилә Сурағолова һыу һәм уны таҙартыу ысулдары тураһында дәрестәр үткәрһә, "Баҡса" факультетында баҡса үҫтерергә яратыусылар ауыл хужалығы фәндәре докторы Ғизәр Мансуров менән осрашты. "Хоҡуҡи белем" факультетында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Вадим Зәйнуллин БР Президенты Мөрәжәғәтенән сығып, республика парламенты эшмәкәрлеге тураһында һөйләне.

## АФАРИН!



# ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШЛӘГӘНДӘР,

## билдән түбән юморҙар юҡҡа сыҡҡан

**Баш ҡала мәктәптәре уҡыусыларының иң яратҡан байрамы быйыл да ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алынып, онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырып үтеп китте. "Шаяниум - 2010" Асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар конкурсы йылдан-йыл үҫенеү даирәһен киңәйтеп, балалар өсөн үткәрелгән мөһим сараларҙың береһе булыуын иҫбат итә килә. Быйыл был мауыҡтырғыс сарала ҡырҡлап команда ярышыуы ла, уларҙың сығышына тамаша ҡылырға килгән халыҡтың күплеге лә ошолар хаҡында һөйләй.**

Һүҙ юҡ, конкурстың кимәле үҫкән. Хаталар өҫтөндә эш эшләнгән, иҫкәрмәләргә ҡолаҡ һалынған, элекке йылдарҙағы кәнәштәр файҙаға булған. Элек мәктәп балаларына хас булмаған билдән түбән юморҙарҙан оялып, тел ҡытыршылығына ҡолаҡ тоноп ултырырға тура килһә, был юлы иркенләп көлөп, күңел асыу мөмкинлеге булды. Командаларҙың ҡыҙыҡлы, мәғәнәле һәм төплө шаяртыуҙарына ҡарап, шундай отҡор, шаян, аҡыллы, һәләтле балалар үҫеүенә бер ҡыуанылды. Бигерәк тә буш шаяртыу менән мауыҡмай, юмор нигеҙендә ниндәйҙер фәлсәфәгә мөрәжәғәт итеүҙәре менән "ХХ Централ" командаһы һәр ваҡыттағыса күпкә өҫтөн торҙо. Ғөмүмән, командаларҙың һәммәһенең сығыштарынан донъяға киң ҡараш йөрөтөүҙәре, мәғлүмәтле һәм үҙ-ара аралашып йәшәүҙәре лә тойомланды. Тимәк, "Шаяниум" балаларҙы берләштереүсе, уй-фекерҙәрен уртаҡлашыусы сара булып тора. Ҡатнашыусылар үҙҙәре лә ошо фекерҙә. Быйыл был сарала һуңғы тапҡыр ҡатнашыусы 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 11-се класс уҡыусыһы Алина Ғиниәтуллина: "Шаяниум" минә үҙ фекеремде ҡыйыу итеп әйтә белергә, үҙемде сәхнәлә тоторға, кешеләр менән киң аралашырға өйрәтте", - тип яратҡан конкурсына рәхмәт белдерҙе.

Тик бер генә нәмә: уҡыусыларҙың йыл һайын шул бер үк Радик Юльяҡшин, Дэни, Гөлнур Ҡарабулатова кеүек йәш башҡарыусыларҙы әләкләүҙән уҙа алмауы ғына күңелде ҡырҙы. Әйтерһең дә, уларҙан башҡа артистар бөткән. Унан һуң, беҙҙең башҡорт донъяһы артистарҙан ғына тормай бит. Был киләһе уйындарҙа командаларға уйланырға ем булыр, тим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс номинация буйынса ла сығыштары иң яҡшы тип табылған дүрт команда финалға сыҡты. Шулар араһынан лайыҡлы рәүештә Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының "ХХ Централ" командаһы Гран-при яуланы. Беренсе урынға Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.RU" командаһы сыҡһа, 140-сы һанлы башҡорт гимназияһының "Ығы-зығы" командаһына - икенсе, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "VIP-йәштәр" командаһына өсөнсө урын бирелде.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

**Теманың дауамы 16-сы биттә.**

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕҪӘ ЙОҠАМЫ?

## Бына һиңә арзан билет!

**Март башынан "Авианова" авиакомпанияһының Өфөнән Мәскәүгә арзанлы рейстар асыуы тураһында хәбәр иткәйнек инде. Авиакомпанияның генераль директоры Владимир Горбунов әйтеүенсә, хәҙер Өфөнән Мәскәүгә билетты 250 һумға ла алып буласа҄.**

27 мартҡа тиклем рейстар "Внуково" аэропортынан башҡарыла. Йәйге расписаниеға күсеү менән, йәғни 28 марттан, рейстар "Шереметьево" (В терминалы) аэропортына күсә. "Мәскәү-Өфө" рейсы аҙнаһына өс тапҡыр: шаршамбы, йома һәм йәкшәмбе булһа, йәйге осорҙа был йүнәлешкә рейстар күбәйеүе көтөлә.

"Авианова" компанияһы Рәсәйҙә иң түбән бюджетлы авиакомпания һанала, бөгөнгө көндә ул Airbus-320 (А320) самолеттарында Әстрахан, Сочи, Дондағы Ростов, Краснодар, Ҡаҙан, Һамар, Пермь, Яр Саллы һәм Өфөгә пассажирҙар ташый. Владимир Горбунов һүҙҙәренә ҡарағанда, был комфортабелле самолеттар 2003 йылда сығарылған һәм 180 урынға иҫәпләнгән. Өҫтәмә хаҡҡа алдан урын һатып алыу мөмкинлеге лә бар. Компания билеттарҙың ҡиммәт булмауына бөтә бизнес-процестарҙы оптималләштереү һөҙөмтәһендә өлгәшә. "Авианова"ның урындарҙа вәкәләтлектәре лә юҡ, хеҙмәткәрҙәр штаты ла ҙур түгел.

Компанияның коммерция директоры Жанна Шалимова билдәләүенсә, билеттарҙың 70 проценты интернет аша тарала. Әлбиттә, бөтә билеттар ҙа мининалы хаҡҡа һатылмай. Әгәр ҙә пассажирҙың үҙе менән алған йөгө 10 килограмдан ашып китә икән, уға артығыраҡ түләргә тура киләсәк. Шулай ҙа дөйөм алғанда компанияның хаҡтары башҡа авикомпаниялар менән сағыштырғанда 30 процентҡа түбәнерәк һәм "Авианова" билетҡа хаҡтарҙы артабан да ошо кимәлдә һаҡлап ҡаласағын белдерә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡалабыҙҙа донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүсе балаларҙың "Һаумы, һаумы, әкиәт!" I ҡала конкурсы башланды. Енеүселәр төрлө номинациялар буйынса билдәләнәсәк. "Алтынай" студияһы енеүселәрҙең әкиәттәре менән СД-диск сығарырға гарантия бирә. Конкурстың лауреаттарын бүләкләү тантанаһы 6 апрелдә Ҡала мәҙәниәт һарайында үтәсәк.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә башҡа миллионлы ҡалалар менән сағыштырыуҙар аша Өфөнөң иҡтисад өлкәһендә өлгәшкән ҡаҙаныштары тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, Өфө миллионлы ҡалалар араһында бик күп йәһәттән алдынғы урындарҙы биләй. Сәнәғәт етештереүе индексы буйынса Өфө Ҡаҙандан ҡала икенсе, торлаҡ төҙөү буйынса - бишенсе, ваҡлап һатыу тауар әйләнеше буйынса икенсе урында.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева һәм халыҡты социаль яҡлау буйынса идаралыҡ начальнигы Данир Халиҡов журналистар менән осрашыуҙа баш ҡала халҡының хоҡуҡи белеме тураһында һүҙ алып барҙылар. Билдәләнеүенсә, сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә ҡулланыусылар хоҡуҡтарын боҙоуҙар кәмемәй. Былтыр, мәҫәлән, ошо хеҙмәттәргә ялыу менән 14 мең өфөлө хакимиәткә мөрәжәғәт иткән. Шуға ла баш ҡала округы хакимиәте эргәһендә эшләүсе махсус төркөмдәр урындарға сыға, ҡулланыусыларға хоҡуҡтарын аңлата.

✓Баш ҡаланың тейешле хеҙмәттәре торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар объекттарын яҙғы ташҡын эҙемтәләренән һаҡлауысы сараларҙы планлаштыра башланы. Быйыл Затон, Шакша, Нижегородка бистәләре, Дудкино һәм Козорез ауылдары, 8 Март ҡасабаһы һыу баҫыуҙан һаҡлана алмаҫ, ахыры. Бындай осраҡҡа тиҙ ярҙам күрһәтеү өсөн 52 кешенән торған Авария-ҡотҡарыу отряды, 10 берәмек техника, 13 берәмек йөҙөү техникаһы әҙерләнгән.

✓24 мартта Республика туберкулезға ҡаршы диспансерҙа "Асыҡ ишектәр" көнө үткәрелә. Иртәнге сәғәт 9-ҙан көндөҙгө 3-кә тиклем юғары квалификациялы белгестәр туберкулезды дауалау, профилактикалау буйынса бушлай консультациялар үткәрәсәк. Шулай уҡ баш ҡаланың Үҙәк, Колхоз, Затон баҙарҙарында граждандарға бушлай флюорография үтеү мөмкинлеге биреләсәк.

АФАРИН!

**Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатына төрлө төбәктән талантлы, ижади балалар йыйылған. Гимназия уҡытыусылары төплө белем биреү менән бер рәттән, йәш рәссамдарҙы һынлы сәнғәткә, композицияға, скульптураға, сәнғәт тарихына ла өйрәтә.**

# ӘЛЕ ҮК РӘССАМДАРСА...

## фекер йөрөтә һәм ижад итә

XI класс уҡыусыһы Эльвина Харрасова гимназияла инде етенсе йыл белем ала. Баймаҡ районы Төркмән ауылында уҡыған сағында уҡ һүрәттәр төшөрөргә ярата, һынлы сәнғәт түңәрәгенә йөрөй. Шуныһы ҡыҙыҡ: ғаиләләрендә берәү ҙә һүрәт төшөрмәй, атаһы ла, әсәһе лә врач булып эшләй. Бәлки, ваҡытында уларҙа ла был талант булғандыр, әммә икенсе йүнәлеште һайлағанға күрә, юғалып ҡалғандыр. Ә Эльвина киләсәктә ошо йүнәлешенән тайпылмай, дизайнер һөнәрен үҙләштерергә уйлай. Әлеге көндә ул тырышып сығарылыш имтихандарына әҙерләнә.

- Күберәк тәбиғәт күренештәрен төшөрөргә яратам, уларҙы төшөргәндә үҙемдең хис-тойғоларымды, уй-кисерештәремде түкмәй-сәсмәй һүрәттәргә күсерәм, - ти ҡыҙ.- Кисерештәремдә бүтәндәргә һөйләп бармайым, уларҙы һүрәттәргә һалыу - күңелем талабы. Тағы ла минә абстракт композициялар оҡшай. Был да шулай уҡ үҙеңдең фантазияңды аҡ ҡағыҙға төшөрөү ул. Төрлө әйберҙәргә биҙәктәр төшөрөргә яратам, шуға күрә лә диплом эшемдә лә ошо йүнәлеш буйынса һайланым. Башымда ниндәйҙер фекер яралһа, илһамланып, уны ҡағыҙға төшөрә башлайым. Ғөмүмән, ижад кешеһе башҡаларҙан уй-фекерҙәре, үҙ-үҙҙәрен тотошо менән айырылып тора: улар бер аҙ хыялый, уйсан, хисле, бер әйберҙе икенсеһе менән сағыштырырға ярата, ябай ғына нәмәлә лә мөғжизә таба белә. Һынлы сәнғәт - үҙе бер мөғжизә иле бит ул. Шул мөғжизәне аңлай, күрә белергә генә кәрәк.

Һынлы сәнғәттә үҙенең кумирҙары ла бар Эльвина Харрасованың. Халҡыбыҙҙың беренсе профессиональ рәссамы Ҡасим Дәүләткилдиевтың ижадын бик үҙенсәлекле, тип һанаһа, урыҫ һынлы сәнғәт донъяһынан Иван Айвазовскийҙың картиналарын ярата. "Иван Айвазовский океан, диңгеҙ төшөрөргә яратҡан. Картиналары аша рәссамдың кәйефен, уйҙарын, тойғоларын аңларға була. Уның картиналарын өйрәнәм, үҙемә ҙур асыш яһайым", - ти ул.

Эльвина шулай уҡ бейеү менән дә шөғөлләнә, ЮНЕСКОның төрлө сараларында ҡатнаша, доклад тар менән сығыш яһай. Үҙ көсөн һынап ҡарар өсөн төрлө конкурстарҙа ла ҡатнаша тырыш ҡыҙ. Күптән түгел "Тирә-йүнебеҙҙе һаҡлау" конкурсында экологик проблемаларҙы сағылдырған композицияһы менән ҡатнашып, 2-се урын, Зәки Вәлиди ижадына арналған республика конкурсында 1-се урын яулай, ә "Глобалләшкән донъяла тормош" халыҡ-ара конкурсында лауреат була. "Һәр кем рәссам булып китә алмай, был кешегә тәбиғәттән бирелгән талант", - тип иҫәпләй Эльвина.

"Күптәребеҙ тормошта дөрөҫ маҡсаттар ҡуйып йәшәй белмәй, ваҡытын юҡҡа сарыф итә, уйланмай, фекерләмәй, тирә-яғындағы иҫ киткес мөғжизәне, матурлыҡты күрмәй, күҙәтмәй..." Эльвина менән һөйләшкәндә уның ошолай ололарса фекерләүенә, тәбиғәтебеҙҙең кескәй генә өлөштәрен дә мөғжизә тип ҡабул итеүенә иғтибар иттем, һоҡландым. Тормош маҡсаты ла бөйөк уның - кешеләргә, ата-әсәһенә, туғандарына, дуҫтарына һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙыу һәм ер йөҙөндә үҙенән һуң яҡты эҙ ҡалдырырлыҡ итеп йәшәү.



ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бүтән уҡыусылар рәхәтләнеп ял иткән осорҙа ваҡытын бушҡа уҙғарырға яратмаған Эльвина тыуған ауылы Төркмән мәктәбендә үҙенең "Тыуған ерем" исемле картиналар күргәҙмәһен асып, ауылдаштарын ҡыуандырған. Шулай уҡ бер картинаһын рамкаға ҡуйып, туған мәктәбенә бүләк иткән. Әле үк уңыштарға табан ҡыйыу атлаған, яҡындарын шатлыҡтары менән ҡыуандырған Эльвинаға изге маҡсаттарының тормошҡа ашыуын теләйек!**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА

яҙып алды.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МӨҺИМ МӘСЬӘЛӘЛӘР...

## Мәскәүҙә хәл ителә

**Төбәктәрҙең уңышлы үҫеше, инновацион иҡтисад юғары квалификациялы кадрҙарға әйә булыуҙы талап итә. Шуға күрә лә бөгөн Рәсәй мәғариф системаһында институциональ үҙгәртеп ҡороуҙар бара. РФ Мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко менән осрашыуҙа БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев һөнәри белем биреү учреждениелары селтәре структураһын үҙгәртеү вариантын ҡарарға тәҡдим итте һәм милли тикшеренеү университеты сифатында Өфө дәүләт авиация техник университеты перспективалары буйынса фекер алышты.**

Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, Башҡорт дәүләт медицина университеты базаһында күп кимәлле университет комплекстарын төҙөү мөмкинлегенә әйә республика. Төрлө кимәлдәге һөнәри белем биреү учреждениелары, тармаҡ министрлыҡтарын һәм ведомстволарын, предприятиеларҙы берләштереүсе белем биреү кластерҙары тотош бурыстар комплексын һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу мөмкинлеген бирәсәк, тигән фекерҙә Раил Сарбаев. Беренсенән, был кадрҙар әҙерләү структураһын ҡулайлаштыра. Икенсенән, белем сифатын күтәрәсәк, өсөнсөнән, йәш быуын берҙәм комплекс сиктәрендә төрлө кимәлдәге һөнәри белем аласаҡ. Бынан тыш, был Башҡортостан Республикаһындағы иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең төп тармаҡтарының инновацион үҫешенә фәнни булышлыҡ күрһәтеү мөмкинлеге бирәсәк. Осрашыуҙа М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты базаһында Педагогик белем биреү үҙәген ойоштороу тураһында ла фекер яңғыраны.

Андрей Фурсенко менән һөйләшеүҙә тағы ла бер мөһим тема: төбәктә машиналар эшләү профилендәге берҙән-бер юғары уҡыу йорто булған суперкомпьютер технологиялары өлкәһендә алдынғылыҡты биләгән Өфө дәүләт авиация техник университетының үҫеш перспективалары ҡаралды. Ғәмәлдәге фәнни-етештереү һәм матди-техник база университетҡа инновация өлкәһендә бик күп бурыстарҙы тормошҡа ашырыу мөмкинлеген бирә.

Бынан тыш, Рәсәй Мәғариф һәм фән министры менән кадрҙар мәсьәләләре, республикалағы ике мәктәптең аварияға ҡаршы саралар федераль программаһында ҡатнашыуы мәсьәләләре тикшерелде.

* * *

**БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев шулай уҡ РФ Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министры Виталий Мутко менән БР спорт резервын әҙерләү һәм Башҡортостанда спорттың төп төрҙәрен үҫтереү перспективаларын да тикшерҙе.**

- Республикала спорттың 16 төрө үҫтерелә, - тип билдәләне Раил Сарбаев. - Матди-техник базаны үҫтереү Рәсәйҙә халыҡ-ара спорт аренаһында лайыҡлы сағылдырырлыҡ һәләтле спортсылар әҙерләү мөмкинлеге бирәсәк.

Осрашыуҙа шулай уҡ Өфөлә спорттың параолимпия төрҙәренә йүнәлтелгән үҙәк төҙөү мәсьәләһе тикшерелде. Спортсыларыбыҙҙың уңыштары юғары әҙерлек кимәлен раҫлай - Параолимпия уйындарының өс көнө йомғаҡтары буйынса Башҡортостан спортсылары Рәсәй йыйылма командаһы яулаған биш алтын миҙалдың дүртеһен алған.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Миләш сәйе

Аҙ ҡанлылыҡтан 1-2 балғалаҡ миләште ике стакан ҡайнаған һыуға һалып, сәй итеп эсергә кәрәк. Эстәге ҡом-ташты иретә, ҡан әйләнешен дә яҡшырта.

### Тымау тейһә

Бәләкәй генә быяла банкаға яртылаш ҡайын бөрөләрен тултырырға ла, быяла тулғансы үҫемлек майы ҡойоп, 7-9 көнгә ҡараңғы урынға ултыртырға. Шул төнәтмәне 1-2 тамсы танауға тамыҙырға. Өйөгөҙҙә бындай төнәтмә гел булһын, эшләүе лә, ҡулланыуы ла еңел.

### Тәмәкесегә бер кәңәш

Йылға ҡыҫалаһын киптереп, порошок рәүешенә килтерәһең һәм тәмәкегә ҡушып тартаһың. Шунан һуң тәмәкегә әйләнеп тә ҡарамайһың.

### Эс таҙартыу

Бөтәбеҙ ҙә тышҡы яҡтан үҙебеҙҙе тәртипкә килтерәбеҙ, ә бына эске ағзаларҙы онотабыҙ. Уларҙы көн дә иртән йыуырға кәрәклеге иҫтән сыға. Ябай ғына бер ысул: иртән ашарҙан алда бер стакан ҡайнаған йәки йылы һыу эсергә кәрәк. Һыу эстәге май, тоҙ ултырмаларын йыуып төшөрә.

### Һеләгәй күп аҡһа

Төкөрөк биҙҙәренең эше боҙолһа, һеләгәй күп аға башлай. Быны бөтөрөү өсөн бер балғалаҡ лимон һутын бер стакан һалҡын һыуға ҡушып болғатырға. Шуны ауыҙға ҡабып, йылынғансы тоторға һәм төкөрөргә. Көнөнә 4-5 мәртәбә эшләргә. 2-3 көндән биҙҙәр яҡшы эшләй башлар.

### Йөрәкте лә "ашатайыҡ"

Күпме ризыҡ ашайбыҙ, файҙаһы тураһында һөйләйбеҙ. Ә бына йөрәкте "ашатыу" тураһында белмәйбеҙ. Кипкән гөлйемеште, ҡыҙыл миләште, баланды, йөҙөмдө, күрәгәне икешәр ҡалаҡ алырға ла, 1 литр ҡайнар һыуҙа бешерергә һәм төнгөлөккә термоста ҡалдырырға. Иртәгеһен башҡа эсемлектәр урынына ошо төнәтмәне эсергә. Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла яһап эсегеҙ.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Гимнастика ҡағиҙәләре

● Гимнастика ҡағиҙә буйынса булғанда, фекерҙе уята, ҡан йөрөүенә ярҙам итә, аш үҙләштереүҙе яҡшырта, һеңерҙәрҙе ҡеүәтләндерә, аппетитты һәм тән йылылығын арттыра, зиһенде аса. Уҡыуға һәм өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуу уята. Шуның өсөн ауылда булғанда йортта һәм яланда эшләгеҙ. Ат менеп йөрөгөҙ, һыуға төшөп йөҙөгөҙ, ҡош тауыштарын тыңлағыҙ, ҡул, аяҡ, һеңер һәм башҡа тамырҙарығыҙҙы хәрәкәтһеҙ тотмағыҙ. Ҡалала булғанда ҡайһы бер ваҡытта булһа ла баҡсаларға барығыҙ, тауға сығығыҙ, һыу буйҙарында, йәшел үлән өҫтөндә, урман һәм әрәмә буйҙарында йөрөгөҙ, саф һауа һулағыҙ. Күк йөҙөндәге зәңгәр түбә һәм болоттарға ҡарап илһам алығыҙ.

● Йәй көнө иртә, мөмкин булһа, таң атҡан һәм ҡояш сыҡҡан ваҡытта торогоҙ. ауыл эргәһенә сығығыҙ. Донъяға яратылған матурлыҡтарҙан, моңло тауыштарҙан илһамланығыҙ. Ошо бәләкәй, бик тә бәләкәй һәм мәшәҡәтле донъяға бер-ике көнгә мосафир булып килгәнегеҙҙе онотмағыҙ.

● Гимнастиканан һуң һыу эсмәгеҙ, бер-ике сәғәт үткәнсе, ашамағыҙ. Ашағандан һуң бер-ике сәғәт үткәнсе, зарядка эшләмәгеҙ. Гимнастика өсөн матур һауалы урын һайлағыҙ.

### Дин ҡағиҙәләре

● Һәр нәмәне бар иткән һәм беҙҙе матур итеп яратып, аҡыл ниғмәте бүләк иткән мәрхәмәтле Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәренә ихлас ҡоллоҡ итегеҙ. Ата-әсә һәм остаздарығыҙҙың һөйөп ҡушҡан бойроҡтарын үтәргә тырышығыҙ.

● Ҡоллоҡ тигәнде көн дә оҙон намаҙ уҡыу, зекер итеү, бөтә эштәрҙе бер яҡҡа ҡуйып, мәсеттәрҙә ятыу, зыяраттарға йөрөү, тип аңламағыҙ, ә Аллаһы Тәғәлә бойорған юл өҫтөндә булыу, бурыстарҙы үтәү, халыҡ менән матур мөнәсәбәттә булыу, мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле булыу, гонаһтарҙан һаҡланыу, тип аңлағыҙ һәм шулай ғәмәл итегеҙ.

● Рәсүлуллаһ Әкрәм әфәндебеҙ килтергән мөбәрәк Ислам шәриғәтенә үҙ белдегегеҙ менән бер хәреф тә арттырмағыҙ һәм бер хәреф тә кәметмәгеҙ. Бер хәрефен арттырған йәки кәметкән кешеләргә һис бер ваҡыт эйәрмәгеҙ. Бәхет-сәғәҙәт иһә тик шәриғәттә. Быны һәр ваҡыт хәтерҙә тотоғоҙ.

● Кейемдәрегеҙҙе, тәнегеҙҙе кер һәм бысраҡтан пакландырған кеүек, күңелдәрегеҙҙе лә нифаҡ, алдау, үс, хөсөт, асыу, золом кеүек боҙоҡ холоҡтарҙан таҙартығыҙ.

● Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеү һәм Аллаһы Тәғәләнең ихлас бәндәләре менән бергә йыйылып берлек булдырыу ниәте менән намаҙҙарҙы мөмкин булғанса йәмәғәт менән ҡылығыҙ.

● Ураҙа тотҡанда нәфсегеҙҙе тәрбиәләүҙе, сабырға ғәҙәтләнеүҙе, фәҡир һәм меҫкен хәлен тәжрибә итеп ҡарауҙы ниәт итегеҙ.

● Малығыҙҙан зәкәт биргәндә йомартлыҡҡа ғәҙәтләнеү, һаранлыҡ кеүек боҙоҡ холоҡтан нәфсене сафландырыу, фәҡирҙәрҙе шатландырыу кеүек изге ниәт итегеҙ.

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

**Төрлө осрашыуҙарҙа, редакцияға килгән хаттарҙа ла бирелгәне бар был һорауҙың: "Мәктәп йәшендәге балалар "Тормош һабаҡтары" дәрестәре аша башҡорт халыҡ педагогикаһы һабаҡтарын үҙләштерә. Ә бына мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн ҡасан ошондайыраҡ берәй тәрбиә әсбабы булдырылыр икән?" Был һорауҙы беҙ, әлбиттә, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы яҙыусы Мәрйәм апай Бураҡаеваға ауҙарғайныҡ һәм гәзитебеҙҙең былтырғы һандарында йәш ғаиләләр өсөн тәнәйҙәр тәрбиәһе әсбабы яҙыла ла башлағайны. Гәзитте быйыл алдыра башлағандар өсөн баҫылып сыҡҡан өс һабаҡтың ниндәй темаға арналғанын ғына ҡабатлап үтәйек. Ҡыҙыҡһынғандар уларҙы табып уҡыр, моғайын.**




# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

### Беренсе һабаҡ: "Балаға нисек башҡортлоҡ тойғоһо һалырға?"

Ғаилә ҡороп, тәүге балалары тыуған йәштәрҙән ишеткәнем бар былдай һорауҙы. Һорау урынлы: башҡорт булыу - ул башҡортса һөйләшеү генә түгел, ә башҡортлоғондо тойоу. Башҡортлоҡ тойғоһо һалыуҙа ир кешенең - буласаҡ атайҙың аҡыл менән эш итеүе иң төп шарт. Уның аҡыл менән эш итеүе ниҙән ғибәрәт, тип һорарһығыҙ. Балаға бар тойғолар ҙа әсә һөтө аша килә. Бала әсә ҡарынында уҡ тәрбиәләнә башлай - ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңларға тейеш атай буласаҡ кеше. Тимәк, буласаҡ атай балаһына башҡортлоҡ тойғоһо һалыуҙы маҡсат итеп ҡуя икән, ул мотлаҡ башҡорт ҡыҙына өйләнергә тейеш. "Минең өсөн иң мөһиме - мөхәббәт, мин кемгә өйләнһәм дә уны башҡортса һөйләштерәсәкмен, мин баланы барыбер башҡорт итәм", тигән фекер төптө дөрөҫ түгел...

### Икенсе һабаҡ: "Башҡортса һөйләшеү генә башҡортлоҡ түгел"

Баланың теле бай, һутлы булһын өсөн быға өйҙә ярым-йорто башҡортса һөйләшеп кенә өлгәшеп булмай. Әйтәйек, йыр яратҡан һәр кеше уның моңло, ишетер ҡолаҡҡа яғымлы булыуын ярата. Көй һәр төрлө бөгөлөштәргә, наҙға, моңға ни тиклем бай була һәм башҡарыусы уны ни тиклем оҫта итеп башҡара - шул тиклем күңелгә ятышлы була. Тел дә шулай. Телмәр ни тиклем саф, таҙа, мәҡәл-әйтемдәргә, сағыштырыуҙарға мул була, уны тыңлауы ла, әңгәмә ҡороу ҙа күңелле. Моңло йыр тыңлаған һымаҡ тәьҫир итә ундай телмәр. Шуның өсөн балаға туған телдә шиғырҙар уҡыу, әкиәттәр һөйләү, йыр тыңлатыу мотлаҡ.

### Өсөнсө һабаҡ: "Баланың буйын да, уйын да тәрбиәлә"

Башҡорт әсәйҙәре-өләсәйҙәре баланың уйын үҫтереүгә, аңын-зиһенен тәрбиәләүгә, зиһенен яҡтыртыуға ныҡ иғтибар иткән. Өҫтәүенә, тәбиғәт балаһы булған башҡорт халҡында шиғри күңеллелек мөлдөрәмә ташып торған. Шуның өсөн дә телмәре бай, мәҡәлле-әйтемле, йырлы-ҡобайырлы, таҡмаҡлы-һамаҡлы булған улар. Бала тәрбиәләүҙә һәр хәрәкәт тиерлек һамаҡлауҙар менән ҡуша башҡарылған. Сабыйҙы бик оҙаҡ ваҡыт имеүҙән айырмағандар, шулай булһа ла ашатыуҙы ла иртә башлағандар. Уның өсөн махсус аҙыҡ әҙерләнмәһә лә, әсә үҙе ашаған ризыҡтың бала ашҡаҙаны эшкәртерлеген йомшартып, аҙ ғына булһа ла /күгәрсен күҙендәй генә, тигәндәр/ ҡаптырғандар. Баланы ашатҡан саҡта төрлө һамаҡлауҙар әйтелгән:

Талымһыҙ бул, әрһеҙ бул,
Тамағың гел туҡ булһын,
Тамағы туҡтың күңеле киң,
Күңеле киндең донъяһы киң.

### Дүртенсе һабаҡ: "Телгә битарафлыҡ үкенестәр тыуҙыра"

**Туған моң, туған тел мөхитенең бала булмышына, ҡанға һалынған һәләтенең артабанғы үҫешенә, холҡ-фиғеленә, тәрбиәһенә тәьҫире тураһында бик аҙ өйрәнелгән. Был йәһәттән кемгәлер, ниндәйҙер ғалим фекеренә таянып фекер әйтеүе лә ауыр. Ул хаҡта бары тик педагог Константин Ушинский яҙмаларында ғына фекер табып була. Тормошта, тотош донъя тәжрибәһендә былдай миҫалдар бихисап, әлбиттә. Тәбиғәттең иң серле, иң ҡиммәтле бүләктәренең береһе булған туған телгә, туған моңға ҡарата битарафлыҡтың үкенесле һөҙөмтәһе, йәки милли булмышыңа ҡарата һаҡсыл булыу ҡыуанысын кисереү өсөн тирә-йүнебеҙгә иғтибарлыраҡ булыу ҙа етә. Ошоно раҫлаған бер ғибрәтле ваҡиға тураһында һөйләмәксемен.**

Ҡыҙым менән ауыр операцияға килгәнбеҙ. Свердловск онкология үҙәгендә шығырым тулы ауырыуҙар. Ваҡ-төйәк ауырыуҙарға һис кенә бирешмәй үҫкән балаларымдың береһе уйламағанда ошондай ҡурҡыныс ауырыу менән ҡайғыға һалды. Быға саҡлы беҙ ишетмәгән ауырыу ине ул. "Мальформация" тип атала, йәғни ҡан тамырҙарының мейеләге бөтөнләй кәрәкмәгән ят матдәне туҡландырыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән шеш кеүек нәмә... Германияла ике йыл буйы мальформацияға операция яһау оҫталығына өйрәнеп ҡайтҡан йәш хирург ҡыҙыма яңы ысул менән операция яһарға тәҡдим итте. Әлбиттә, инструменттарҙы Германиянан ҡайтарырға кәрәклеге, ә уның ҡиммәтле булыуы тураһында иҫкәртте. Яңы ысул, бер яҡтан, ҡиммәтле булыуы менән аптыратһа, икенсе яҡтан, хәүефләндерҙе. Ул ысул - эмболизация тип атала һәм киҫеп түгел, ә катетрҙы ҡан тамырҙары аша мейегә үрмәләтеп, мальформацияны туҡландырып торған ҡан тамырҙарын көпләп ҡуйыуҙан ғибәрәт. Былдай ысулдың өҫтөнлөгөн хирург былай тип аңлатты: "Мальформация мейе ҡапҡасынан ныҡ аҫта урынлашҡан. Был осраҡта трепанация юлы хәүефле, сөнки мейенең ниндәй ҙә булһа күҙәнәгенә теймәйенсә операция эшләү мөмкин түгел. Күҙәнәктәрҙең аҙ ғына зыян күреүе арҡаһында ҡыҙығыҙҙың йә һул күҙе, йә һул яҡ аяҡ-ҡулы зәғифләнәсәк, тигән һүҙ". Миңә ошо Үҙәктә Балаҡатай районынан башҡорт врачы эшләүен, бик ярҙамсыл булыуын әйткәйнеләр. Ундай саҡта кемдән генә йыуаныс эҙләмәйһең. Үҙ милләтең, моғайын, дөрөҫөн әйтер, белешмә алырлыҡ әҙәбиәт тә алырмын, тип өмөтләндем. Уны таптым. Хәлиҙә исемле ҡатын. Был ысул менән яһалған операцияларҙың, ысынлап та, яңы булыуын, хирургтың оҫта ҡуллы икәнлеген әйтеп тынысландырҙы. Мин унан мейе ауырыуҙары һәм мальформация тураһында әсбаптар һорап алдым. Шулай итеп, беҙ ризалыҡ бирҙек. Шөкөр, операция уңышлы үтте. Ярты йылдан һуң тикшерелергә килдек. Башына ауыр операция үткәргән һәм даими тикшерелеп торған Зоя исемле мәрйә ҡатын менән бер бүлмәгә тура килде ҡыҙым. Мәскәү өлкәһенән икән. Ҡыҙым янында даими булам. Зоя менән дә аралашабыҙ.

- Телегеҙ шундай яғымлы. Шуға иғтибар итәм. Исемдәрегеҙ ҙә музыкаль. Ниндәй милләт һеҙ? - тип һораны ул бер көн.

- Башҡорт. Башҡортостанданбыҙ.

- Мин бында операция яһатҡан саҡта башҡорт милләтле бер ҡатын менән бер палатала ятҡайным. Силәбе өлкәһенәнмен, тине. Унан башҡортса бер һүҙ ҙә отоп алғайным. Исемемә оҡшаш булғанға хәтерҙә ҡалған... "Зая" тигән һүҙ ул. Ә бәлки... исем менән генә бәйле түгелдер был һүҙҙең хәтерҙә ҡалыуы. Фажиғәгә бәйле ул...

- Бында күңелһеҙ ваҡиғалар йыш булалыр инде,- тинем.

- Уныһы шулай. Әммә ундай хәлде осратҡаным булманы. Фәһемле, хатта ғибрәтле ул. Теләһәгеҙ, һөйләйем, - тине лә яңыраҡ ҡына онкология үҙәгендә булған хәл тураһында бына нәмәләр һөйләне. - Ул ҡатын үҙен Мария тип таныштырҙы. Силәбенең Маяҡ касафатынан ҡалған сир ине унда. Башындағы шешкә икенсе тапҡыр операция эшләтергә килгәйне. Өс балаһы алмаштилмәш килеп йөрөй. Гел генә рус телендә аралашһалар ҙа рус түгеллектәре йөҙҙәренән күренеп тора. Уларҙың русса һөйләшеүҙәре мине әллә ни аптыратманы. Хәҙер бит күптәр үҙ-ара русса аралаша. Марияны операцияға алып киттеләр. Балалары көтөп ҡалды. Миңә лә шул көндә эшләнеләр операцияны. Миңә эмболизация ысулы менән яһағас, үҙемде насар тойманым. Янымда ҡыҙым булды. Операциянан һуң Мария менән тағы бер бүлмәгә тура килдек. Уның хәле ауыр ине - телдән ҡалғайны. Борсолорға ярамай, мөмкин тиклем тыныс булырға кәрәк. Марияның яңынан теле асыласағына ышандыралар врачтар. Бер көн, ысынлап та, Марияның теле асылды. Ул шул тиклем ҡыуанды. Миңә лә ни типтер өндәште, балаларына ниҙер әйтте. Әммә уның һүҙҙәрен бер кем дә аңламаны. Мария ымлап та, ишара менән дә аңлатырға маташа. Шунан уны бер кем дә аңламағанына борсола башланы. Өс балаһы бер-береһенә ҡарашып алған булалар ҙа аптырашалар.

- Нимә ти ул? Аңламайһығыҙмы ни? - тип һорайым мин дә Мария өсөн борсолоп.

- Ул ауылса, өләсәй кеүек һөйләшә. Беҙ уны аңламайбыҙ, - тине ҡыҙы.

-Ауыл теле тигән тел булмай. Ниндәй милләт һуң һеҙ? - тип һорайым.

- Башҡорттар беҙ. Тик беҙ башҡортса белмәйбыҙ, - тине өлкән улы. Ә әсә кеше һаман ниҙер аңлатырға тырыша, өҙгәләнә.

- Атайым белә лә ул. Ул бәләкәй туғаныбыҙҙы ҡарап ҡалды.

- Бына һиңә марксистик-ленинсы ғаилә. Бына һиңә уртаҡ совет милләте, - тип йәнем көйә башланы ят кешеләр

өсөн. - Табыҙ берәй башҡортто. Юҡмы ни бында берәйһе?

- Бер ауырыу бар Силәбенән. Ул ҡуҙға алмай ята, - тине улы. Медсестра йүгереп килеп инде. Марияны тынысландыра, һеҙгә борсолорға ярамай, ти. Ошоғаса һин дә мин русса аралашҡан ҡатын әле килеп был телдә бер һүҙ ҙә әйтә алмай. Ул әйткәнде башҡалар аңламай. Медсестра тынысландырыу өсөн Марияға укол һалды, балаларҙың береһен Хәлиҙә исемле врачты алырға ебәрҙе. Ул килгән саҡта ҡатындың хәле насарайғайны инде. Дежур врачты саҡырттылар. Хәлиҙә әсәнән ниҙер һораны. "Эй, Хоҙайым, үткән бит ғүмерем заяға. Мин үҙ-үҙемә ят кешемен икән дә. Үҙ балаларым аңламай мине"... тигән ул. Марияны алып киттеләр. Реанимация бүлегенә һалғандар. Хәлиҙәне тәржемәсе итеп саҡырҙылар. Бына бит тәбиғәт мөғжизәһе. Башҡорт кешеһе булмышы өсөн ят булған рус телен оноҡкан. Ә туған теле онотолмаған. Тимәк, туған тел үҙең менән бергә яралған аға кеүек...

**Туған телгә ҡағылған ошондай ваҡиғалар һәр саҡ уйландыра һәм ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең был мәсьәләгә үтә лә еңел ҡарауы борсоуға һала.**

## Бишенсе һабаҡ: "Көйһөҙләнгән баланы алдаштырыу"

Бәләкәй балалар ымлыктар, һүҙҙәрҙе ҡабатлап һамаҡлауҙар, таҡмаҡтар яратa. Шуның өсөн ҡарһүҙ /әкиәт/ һөйләгәндә йәки алдаштырған саҡта бала күңелен арбау өсөн ошо алымды ҡулланырға кәрәк. Әйтәйек, кисен йоҡларға һалған саҡта:

- Ана, кәкүкте тыңлайыҡ әле, кәк-к-күк, кәк-к-күк, йоҡлайыҡ, йоҡлайыҡ, иртәгә иртүк торайыҡ, торайыҡ, тип әйтә. Бесәйҙе тыңла әле, мыяу, мыяу, һин һаман уяу, уяу, ә минең йоҡом килә, йоҡом килә, ти. Ә төн былай ти: "Яҡтыны ҡаплайым-ҡаплайым, төн яһайым-яһайым, йоҡондо һаҡлайым-һаҡлайым".

Уйынсыҡтарына ҡарата ла шундай тынысландырғыстар, арбаткыс-алдаштырғыстар уйлап сығарып була. Бындай алдаштырғыс һүҙбәйләнештәрҙе баланың мыжыған, көйһөҙләнгән саҡтарында - юлдамы, ҡунаҡ килгәндәме, ҡыҫҡаһы, кеше араһында булғанда, файҙаланыу уңайлы. Ундай саҡта баланың сәменә тейеп тыйырға ярамай, ә алдаштырыу уңайлы.

- Илама, оят була. Мыжыма, ана ағай /апай, инәй, олатай һ.б./ ҡалай насар бала, тип көләп тора. Туктамаһаң, мин һиңә тегене йәки быны алып бирмәйем. Тукта, юғиһә, ҡайтҡас, кәрәгеңә бирәм мин һинең, - тип тыйып маташыу дөрөҫ түгел.

Баланы ҡурҡытып тыйып булмай. Ул отоpo ҡарышып китә, ярһый. Ҡайһы берҙәре ниндәйҙер сәбәп менән мыжып көйһөҙләнһә, икенселәре ни өсөн киреләнгәнен үҙе лә аңлап етмәй. Сөнки арый, ялыға, һауа етмәй, кешеләр араһында һауа тынсыулана йәки берәйһенең күҙ ҡарашы көслә булып, күҙ тейеүҙән тәне ҡысыта башлай.

Әсәйҙәрҙең күбеһенең башына килмәгән тағы бер сәбәптең булыуы ла ихтимал. Был сәбәп - әсәнең эске күңел торошо. Уның үҙенең был сәбәпте һиҙмәүе лә ихтимал, ә борсоулы уйҙары шунда уҡ балаға күсә. Билдәле булыуынса, бала тыуып, кендеге киҫелгәс, әсә менән бала физик яҡтан айырылһа ла биологик яҡтан бер йәшкә тиклем айырылмай, ә өс йәштәргә тиклем бала әсәйҙең "мине" менән йәшәй. Шуға ла был осорҙа әсә менән баланың психологик берлеге тығыҙ була. Был осорҙоң әсә өсөн ынғай яғы бар: әсәлә баланың эске торошон тойоу шул тиклем көслә була, хатта бала күҙ алдында булмаһа ла уның торошон әсә тойоп белә.

Шулай итеп, әйтәһе фекеребеҙҙең төп әрәсәһе - бала көйһөҙләнә башлаһымы, уның сәбәбен эҙләргә лә, ҡурҡытырға ла, оялтып маташырға ла түгел, ә шул мәлдә фәҡәт иғтибарын ситкә йүнәлтергә, албырғатырға, алдаштырырға кәрәк. Әйтәйек, бала юлда мыжый башлаһа, тәҙрәгә йәки берәй билдәһеҙлеккә күрһәтеп, булмаған нәмәне бар итеп алдаштырып була.

- Ҡара әле, ҡап-ҡара, ҡап-ҡап-ҡара ғына ҡош балаһы ҡанаттарын леп-леп, леп-леп итеп осоп китте. Ана, ҡара әле, хәҙер күренәһең. Ана, ул һине эҙләй шикелле. Ҡайҙа мап-матур ғына ап-аҡ ылы ғына Даян /ҡайҙа Наза/, тип эҙләй. Ана, ҡара әле, хәҙер-хәҙер күренер. Бейеккә-бейеккә, түп-түңәрәк, ҙуп-ҙур ҡояшҡа табан осоп китте.

- Уй, балаҡайым, башыңа бәп-бәләкәй генә мап-матур ғына бер бөжәк ултырған. Хәҙер табайыҡ. Әллә ҡайҙа, әллә ҡайҙа осто ла киттесе. Ҡанаттары ҡып-ҡыҙыл ғына /баланың яратҡан төҫө була, шуны әйтергә кәрәк. Һап-һары ғына, ап-аҡ ҡына/. Ана, ана осоп китте. Бәп-бәләкәй генә бит әле. Ишетәһеңме, з-з-з /ж-ж-ж/ итә. Эй, анау самолет /трамвай, автобус һ.б./ жыу-жыу, таһыр-тоһор итеп, бәп-бәләкәй генә мап-матур ғына бөжәктең безелдәгәнен ишетмәй ҡалдыҡ. Ай, әттәгенәһе. Әйҙә, тағы тыңлайыҡ әле. Хәҙер без-з-з итеп осоп килер.

Бына ошолайтып баланың иғтибарын албырғатҡан саҡта әсәнең үҙенең дә борсоулы уйҙары бер аҙға онотолоп тора. Ул үҙе лә тыныслана. Ә, бәлки, тәбиғәт уны ошо борсолоуҙарҙан ҡурсалау, ҡотҡарыу өсөн баланы "мыжыталыр". Тәбиғәт серен кешелек донъяһы аңлап та, белеп тә етмәй әле. Байтаҡ серҙәр хаҡында фараз итеп кенә була. Сәбәпһеҙ бер ни ҙә булмай. Шуның өсөн бала мыжый икән, ҡапыл ҡыҙып китеү, уға ауыр яза биреү, ҡулынан һелкетә тартып алыу, шапылдатып һуғып ебәреү, баланың мыжыҡ мәлен тирә-йүнендәге кешеләрҙең иғтибар үҙәгендә ҡалдырыу дөрөҫ булмай. Әгәр баланы тыйыу өсөн ул ҡуптән һораған, әммә алып биреү ярамаған әйберҙе вәғәҙә итәһең икән, был хәл бала хәтерено нык уйылып ҡаласаҡ һәм теләгән нәмәне алдырттыуҙың ошо ысулы ғәҙәтенә инеп китеүе лә ихтимал. Бындай отошло осраҡтарҙы бала тиҙ үҙләштереп ала.

Һүҙҙәр уйнатып алдаштырғыстар уйлап табыуҙы барыбыҙ ҙа булдыра алабыҙ. Баланы тынысландырыуҙа туған моң көйәте лә ҙур әһәмиәткә эйә. Бәләкәй бала байтаҡ һүҙҙәрҙе аңламаһа ла, әсә ауыҙынан сыҡҡан моңдо тоя. Моң, тигәс, ҡайһы бер йәш әсәләрҙең йыр тип аңлап ҡуйыуы ихтимал. Туған телдә әйтелгән һүҙ - үҙе үк туған моң ул. Ул моңдо ҡолаҡ ҡына тыңламай, күңел тоя. Туған моңдоң тынысландырыу көс-ҡеүәткә эйә булғанын барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Тик ҡуптәребеҙ туған телдең дә шул уҡ туған моң икәнлегенә генә иғтибар итмәй. Әлбиттә, таҙа, бай, һутлы, ихлас әйтелгән туған тел тураһында бара һүҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәрйәм апай Бураҡаева башлап ебәргән был эшкә - мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабын яҙыуға башка педагогтарҙын, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапкыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттархәбәрҙәр көтәбеҙ.**

*ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ*

# ҒАРИФ МӨХӘМӘТЙӘРОВ



**Мөхәмәтғариф Зәкир улы Мөхәмәтйәров 1918 йылда Башҡортостан автономияһының хәрби көстәре - Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең көрәштәше, адъютанты. Тыуымышы менән Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенән (хәҙерге Силәбе өлкәһе). Күренекле башҡорт яҙыусыһы Хәй Мөхәмәтйәровтың (1911-1941) ағаһы. Әйткәндәй, уның атаһы Ғабдрафиҡ Мөхәмәтйәров та Силәбе башҡорттары араһында танылған милли хәрәкәт эшмәкәре була. 1919-1920 йылдарҙа Арғаяш кантоны ревкомитеты рәйесе булып эшләй.**

Ғариф Мөхәмәтйәров Силәбе ҡалаһында дүрт класлы училище тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алынып, унда хәрби мәктәптә уҡый. Прапорщик званиеһында тыуған яғына ҡайта.

1917 йылда Ғ. Мөхәмәтйәров Нуриғәзәм Таһиров менән бергә Силәбе өйәҙендә Башҡортостан автономияһы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнә. Әммә бында большевиктарҙың йоғонтоһо ла ҙур була. 1918 йылдың ғинуарында большевиктар пропагандаһын тыңлап ҡайтҡан фронтовик-башҡорттар, Ҡорбанғәлиевтар йоғонтоһонда булған Арғаяш кантоны башҡармаһын таратып, башҡорт ҡоролтайҙарының ҡарарҙарын танымау тураһында ҡарар ҡабул итә. Арғаяшта Совет власын урынлаштыра.

Шуға ҡарамаҫтан, 27-30 ғинуарҙа үткән Арғаяш кантоны съезында, кантон башҡарма комитетына Башҡортостан автономияһы яҡлы Нуриғәзәм Таһиров, Ғариф Мөхәмәтәйров, Ғәбделхәй Иркәбаевтар һайлана. 25 апрелдә үткән 2-се Кантон съезында большевиктар менән милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре араһында ер мәсьәләһе буйынса ҡыҙыу бәхәс тыуа. Н. Таһиров, Ғ. Мөхәмәтйәровтар Силәбе һәм Ҡыштым ҡусҡенселәренә башҡорт ерҙәрен бүлеп биреүгә ҡырҡа ҡаршы сыға. Силәбе ЧК-һы уларҙы, контрреволюцияла ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуя. Ләкин оҙаҡламай Силәбе ҡалаһы большевиктарға ҡаршы баш күтәргән Чехословак корпусы ҡулына күсә.

1918 йылдың 7 июнендә Силәбе ҡалаһында Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хөкүмәте янынан үҙенең эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәрә. Башҡорт хөкүмәте тәү сиратта үҙенең хәрби көстәрен - Башҡорт милли армияһын ойоштороу эшенә тотона. Хәрби эштәр менән идара итеү өсөн 12 июндә Башҡорт хәрби шураһы ойоштoрола. Хәрби шураның ағзалары итеп Ғ. Таған, Т. Ғисмәтуллин, Ғ. Иркәбаевтар менән бергә прапорщик Ғариф Мөхәмәтйәров та һайлана.

1918 йылдың июнь-июль айҙарында Мөхәмәтйәров Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге мөдире Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе, артабан өлкән адъютанты булып хеҙмәт итә. Мобилизация эше менән шөғөлләнә. Ошо осорға ҡараған мөһим генә документтарҙа З. Вәлиди менән бергә уның ҡултамғаһы тора.

1918 йылдың августында аҡтар Арғаяш кантонынан сыҡҡан Башҡорт хәрби шураһы ағзалары менән ҡыҙыҡһына башлай. Силәбеләге Урал корпусы штабы 11 августа Ырымбурға, Башҡорт хәрби шураһына ебәргән телеграммаһында: "...состоят ли в Военном совете Тагиров, Мухамедьяров, Магасумов, Хакимов и были они в большевистском совете?", - тип төпсөнә. Ә инде прапорщик Мөхәмәтйәров Арғаяш кантонында күренеү менән уны ҡулға алалар. "Башкирский военный совет распорядился послать в Аргаяшский кантон, находящийся в его распоряжение, временно зачисленный к 2-му Башкирскому полку конный отряд под начальством подпоручика Добринского и члена Военного совета прапорщика Мухамедьярова. Последнему были даны определенные секретные директивы о розыске дезертирующих солдат. Командир Уральского отдельного корпуса почему-то счел нужным вмешаться в это дело и послал казачий отряд для разоружения нашего.

Казачий отряд 19 августа исполнил поручение комкора и арестовал члена нашего Совета Мухамедьярова и подпоручика Добринского", - тип яҙа Зәки Вәлиди Себер хөкүмәтенең хәрби министрына һәм башҡорт вәкилдәрен иреккә сығарыуҙы һорай. Мөхәмәтйәровты оҙаҡламай сығарғандарҙыр, күрәһең, сөнки, 1918 йылдың сентябрендә ул Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Арғаяш кантонының иреклe отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Бында Башҡортостан автономияһы власына ҡаршылыҡ ҙур була. Бер яҡтан, Ҡорбанғәлиевтар халыҡты Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы ҡотортһа, икенсе яҡтан, Арғаяш башҡорттары араһында большевиктарҙың йоғонтоһо көслә була. Октябрь айында Башҡорт хәрби шураһының Хәрби-тәфтиш комиссияһы, Арғаяштағы хәлдәрҙе тикшереп, Башҡортостан автономияһына ҡаршы эшләгәндәрҙе, 1918 йылдың башында Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесен үлтереүҙә ҡатнашҡан кешеләрҙе ҡулға алырға, ҡайһыларын атырға, тигән ҡәтғи бойороҡ бирә Ғариф Мөхәмәтйәровҡа.

1918 йылдың ноябренән прапорщик Мөхәмәтйәров 2-се Башҡорт уҡсы полкының ылау начальнигы булып хеҙмәт итә. Подпоручик званиеһын ала. 1919 йылдың ғинуарынан 2-се Башҡорт кавалерия полкына эскадрон менән етәкселек итә. 18 ғинуарҙа Нуҡай ауылында ҡыҙылдарға ҡаршы алышта күрһәткән батырлығы өсөн поручик дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Башҡортостандың хәрби революцион хөкүмәте - Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. 1919 йылдың мартынан Башҡорт Совет республикаһының хәрби эштәр буйынса комиссары Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе вазифаһын үтәй. 1920 йылдың мартынан Арғаяш кантоны хәрби комиссары ярҙамсыһы, артабан кантондың аҙыҡ-түлек комиссары булып эшләй.

1920 йылдың июнендә үҙенең көрәштәштәре - Башревком ағзалары менән ҡуша, Үҙәк властың май декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эшен ҡалдырып китә. Зәки Вәлиди большевиктарға ҡаршы көрәште дауам итеү өсөн Төркөстанға юлланған мәлдә, Ҡаҙағстанда, Ғ. Мөхәмәтйәров уның янында була. Вәлиди уны кире Башҡортостанға ҡайтарып ебәрә: "Үҙем менән бергә бер һалдат бар. Янымдағы бәғзе әҫәрҙәремде, мылтыҡтарҙы атка артмаҡланыҡ. Ҡалған әйберҙәрҙе, илдең архивын Стәрлетамаҡтағы хөкүмәткә, тәҙелә башлаған Үҙәк музейға һәм китапханаға тапшырыу өсөн, адъютантым Ғариф Мөхәмәтйәровҡа бирҙем. Ул хәлде яҡшы белә ине... ", - тип яҙа Вәлиди.

Ғариф Мөхәмәтйәров тыуған яғына ҡайтып, артабан Арғаяш кантонында эшләй. 1927-1928 йылдарҙа ул Арғаяш кантон башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында була. 1929 йылда уны, 1918 йылда Арғаяш кантонында большевиктарҙы эҙәрлекләүҙә ғәйепләп, партия сафынан сығаралар. Ғариф Зәкир улы Мөхәмәтйәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Ләкин 30-сы йылдарҙың репрессия елдәре уға ла ҡағылмай үтмәгәндер.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

✓ *Милли-төбәк компоненты предметтары буйынса программаларҙы яңыртып, белем биреүҙең заманса технологияларына ярашлы яңы әсбаптар булдырыу йәһәтенән эшебеҙ бик һүлпән бара.*

# ҠОРОЛТАЙ МИЛЛӘТ КИЛӘСӘГЕН ҠОРА,

## йәки Йәмәғәт ойошмаһының абруйы һәм статусы тураһында

(Башы 3-сө биттә).

**Айрат Искәндәров:** Ҡоролтай эшмәкәрлегенә анализ биргәндә тағы ла бына нимәгә иғтибар йүнәлтер инем. Район ҡоролтайҙары күп осраҡта үҙ яйына ҡуйыла, улар урындағы хакимиәттәр менән берлектә ағымдағы эштәрҙә ҡатнашыуҙан ары китмәй. Ҡоролтай етәксеһененең үҙенең һөнәри бурыстары бик күп, ваҡыты ла самалы, сөнки һәр кемдән үҙ вазифаһына йөкмәтелгәнде лә сифатлы башҡарыу талап ителә. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ күбеһенсә үҙ ҡаҙаныбыҙҙа үҙебеҙ ҡайнайбыҙ. Һуңғы йылға тиклем ҡоролтайыбыҙҙың Башҡарма комитеты беҙгә иғтибарын аҙыраҡ бүлде, күп мәсьәләләрҙе хәл иткәндә район ҡоролтайҙары ситтәрәк ҡалды. Беҙ Башҡарма комитет составына инмәгәс, теге йәки был мәсьәлә буйынса ҡараштарыбыҙ һәм тәҡдимдәребеҙ ҙә ваҡытында иҫәпкә алынмай. Үҙәк ҡоролтайыбыҙ етәкселеге башлыса башҡа төбәктәрҙә йәшәүсе башҡорт ҡоролтайҙары менән күберәк эш итә, был да Башҡортостан ҡалалары һәм районддары ҡоролтайҙарының әүҙемлеге кәмеүенә килтерә. Былтыр, бигерәк тә быйыл, беҙгә иғтибар көсәйеү менән, район ҡоролтайҙары эшмәкәрлеге лә күпкә әүҙемләште.

**▸ Йәмәғәт ойошмаларына формаль ҡарау урындағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелегенә ҡамасаулай, тип әйтмәксеһегеҙме?**

**Айрат Искәндәров:** Тап шулай. Беҙҙең эшебеҙҙә формализм аҙыраҡ булһа, йәштәрҙе лә күберәк йәлеп итеп булыр ине. Йәштәр отчет биреү өсөн, йәиһә өҫтән төшөрөлгөн күрһәтмәләргә ярашлы ойошторолған сараларҙы үҙһенмәй. Улар заманса, йәштәрсә ойошторолған яңы проекттарҙа теләп ҡатнаша.

**▸ Ҡоролтай эшмәкәрлегенә кем етәкселек итә, шул да бик мөһим. Йәшерен-батырын түгел, әммә ҡоролтай кеүек оло йыйынға төрлө чиновниктар, вазифалы кешеләр, икенсе төрлө әйткәндә, "туй генералдары" делегат булып һайланғас, Башҡарма комитетта ла күпселекте "исемле" шәхестәр тәшкил итә. Ҡоролтайҙан һуң күпмелер ваҡыт үтеүгә, йәмәғәт эштәрен әүҙем һәм теләп башҡарыусыларға ҡытлыҡ башлана. Шунан һуң Башҡарма комитет үҙ составына "легитим" булмаған яңы ағзаларҙы кооптация юлы менән булһа ла индерергә мәжбүр була. Әлбиттә, "туй генералдары"нан фәтүә булмағас, һайланып ҡуйылмаһа ла, ғәмәли эште үҙ иңенә алыусылар яуаплылыҡтан ҡасмай, ҡулынан һәм аҡылынан килгәндең барыһын да эшләргә тырыша. Был юлы ла шул уҡ тырмаға баҫмаҫбыҙмы?**

**Айрат Искәндәров:** III ҡоролтай эшендә беҙҙең Совет районынан (район хакимиәте етәксеһенән башҡа) 13 кешелек делегация ҡатнашасаҡ. Делегатлыҡҡа кандидат сифатында 29 кеше теркәлгән, шуларҙың яртыһынан күберәге - йәштәр. Улар - төрлө өлкәләрҙә эшләүсе белгестәр, һәр береһенең программаһы бар, йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнашырға теләктәре лә етерлек. Уларҙың күбеһен Өфөлә лә, тотош республика кимәлендә лә яҡшы беләләр. Алдағы йыйыныбыҙҙағы һайлау һөҙөмтәһендә делегаттарыбыҙ составында йәмәғәт эшмәкәрлеген юғары кимәлдә башҡара алырлыҡ йәштәребеҙ 30 проценттан күберәк булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Минеңсә, ҡоролтайға делегаттар һайлау принциптары бик дөрөҫ билдәләнгән, һәм элекке хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн, уларҙың мотлаҡ үтәлеүе фарыз.

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Беҙҙә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң яңы ҡоролтай йыйғансы саманан тыш оҙаҡ ваҡыт уҙып китә. Ни эшләптер, башҡа халыҡтар үҙ йыйындарын беҙгә ҡарағанда күпкә йышыраҡ ойоштора. Улар бер-береһе менән йышыраҡ кәңәшләшеп, фекер уртаҡлашып, бер-береһенә нисек булышлыҡ итеү, үҙ халҡын юғарыраҡ кимәлгә күтәреү мәсьәләләрен хәл итә, ҡәүемдәштәрен ҡуҙғытып, күңелдәренә ҡуҙ һалып тора. Алдағы III ҡоролтайыбыҙҙа уртаға һалып һөйләшерлек проблемалар бик күп, уларҙы хәл итеү юлдарын табыу өсөн ваҡыт та, көс тә күп талап ителәсәк. Шуның өсөн ошо оло йыйындың киләсәгебеҙ өсөн ни тиклем әһәмиәтле булыуын яҡшы аңлайбыҙ. Ҡоролтайҙа тоҡандырылған рух ялҡынын оҙаҡҡараҡ еткерә алһаҡ ине, тим. Оҙағыраҡ йыйылмай торғас, ул әүҙемлек һүнеберәк ҡала беҙҙә. Шуның өсөн бер нисә күрше төбәк ҡоролтайҙары, мәҫәлән, Өфө районддары ҡоролтайҙары, йәки Урал аръяғы райондары ҡоролтайҙары ассоциацияһы эшмәкәрлеген өлгө итеп ҡуйырлыҡ кимәлгә еткереп, республикабыҙҙың башҡа төбәктәрендә лә ошо рәүешле даими эш алып барыу бик файҙалы булыр ине. Ысынлап та, Башҡарма комитеттың төп иғтибары Рәсәй төбәктәренә йүнәлтелгәс, үҙебеҙҙең урындағы ҡоролтайҙар эше үҙ ағышына ҡуйыла. Шуға күрә киләсәктә ҡоролтай эшмәкәрлегенең яңы формаларына таяныу һөҙөмтәлерәк булыр ине.

Милли мәғариф мәсьәләләрен алһаҡ, шулай уҡ хәҙергә тиклем хәл ителмәгән проблемалар байтаҡ. Милли-төбәк компоненты предметтары буйынса программаларҙы яңыртып, белем биреүҙең заманса технологияларына ярашлы яңы әсбаптар булдырыу йәһәтенән эшебеҙ бик һүлпән бара. Күрше Татарстанда балалар баҡсалары өсөн бик файҙалы әсбаптар күптән сығарыла, ә беҙҙә улар һаман да юҡ.

**▸ Бәлки, беҙҙең ҡоролтайҙарҙа өҫтән төшкән күрһәтмәләргә ярашлы эшләү ысулына өйрәнеп киткәндәрҙер. Ниҙер ҡушыла икән - эшләнә, күрһәтмә булмаһа - әүҙемлек тә юғыраҡ. Быны "идара ителеүсе демократия", тип тә атарға була. Шуның өсөн байтаҡ ҡына райондарҙа ҡоролтай етәксеһе итеп урындағы хакимиәттә эшләүсе вазифалы кешеләрҙе һайлайҙар. Хәҙерге шарттарҙа етәкселеккә йәшерәк лидерҙарҙы күтәреү урынлыраҡ түгелме һуң?**

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Мин үҙем дә район хакимиәтендә эшләйем. Йәмәғәтселек эшен башҡарыу өсөн теләк тә, мөмкинлектәр ҙә кәрәк. Беҙ эшебеҙҙе күрһәтмә буйынса ғына түгел, үҙ теләгебеҙ һәм башланғысыбыҙ менән башҡарабыҙ. Ысынлап та, быға тиклем башлыса өҫтән ҡушылғанды үтәүселәр лидерҙар рәтендә йөрөнө. Улар ҡоролтайға делегат булып һайлана ла, аҙаҡ үҙенә йөкмәтелгән йәмғиәт бурысын үтәү тураһында артыҡ борсолмай. Ҡоролтай кеүек йәмәғәт ойошмаһында үҙ башланғысы һәм ынтылышы көслө булған шәхестәрҙең күберәк булыуына өлгәшеү зарур. Ә йәштәребеҙ араһында ундай лидерҙар бар, уларҙы йәмәғәт эшенә ылыҡтыра һәм күтәрә белеү генә кәрәк. Әлегә тиклем уларҙың күбеһе иғтибарҙан ситтә ҡалып, ғәмәли эштәргә йәлеп ителмәй килде. Тап шуның өсөн йәштәр энергияһын ҡоролтай эшмәкәрлегенә йүнәлтеүҙе мин бик урынлы һәм ваҡытлы, тип һанайым.

**▸ Ә йәштәрҙә энергия ла, яңылыҡҡа ынтылыш та, дөйөм мәнфәғәт өсөн көрәшкә ҡушылырға әҙер булыу ҙа һиҙелеп тора. Һуңғы осорҙа оло быуын вәкилдәренең түгел, ә әүҙем йәштәребеҙҙең башҡорт мәнфәғәтен, халыҡ хоҡуҡтарын яҡлап, милли ихтыяждарыбыҙ хаҡына сәйәси талаптар менән сығыш яһауы осраҡлы түгелдер...**

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Йәштәрҙе төрлө юлдар менән әүҙемләштереп була. Мәҫәлән, мәктәп уҡыусылары "Шаяниум"да ҡатнашып, бер-береһе менән яҡындан таныша, фекерҙәре менән уртаҡлаша, бер командаға тупланып сығыш яһау барышында уларҙың яңы сифаттары асыла. Һуңынан ошо уйында әүҙем ҡатнашып йөрөүселәр студенттар араһында ла лидер булып китә. Мин Ленин районы хакимиәтенә эшкә килгәндә башҡорт лицейы булһа ла, башҡорт балаларынан ойошторолған бер команда ла юҡ ине. Бер ойоштороп ебәрһәң, балалар үҙҙәре үк ошондай эштәрҙә бик теләп ҡатнаша. Хәҙер беҙҙең районда ла, урыҫ мәктәптәрендә уҡыуҙарына ҡарамаҫтан, 9 башҡорт командаһы бар.

**Мәрфуға Мостафина:** Былдай уйындар уҡыусыларҙы ойоштороп ебәреү өсөн бик уңайлы булһа ла, улар даими эшләгән ойошма ролен үтәй алмай. Уйын уҙғарыу өсөн йылына бер йыйылалар ҙа, таралышалар. Район кимәлендә уҡыусыларҙы даими рәүештә йәлеп итерлек үҙәк булдырыу тураһында уйларға кәрәктер ул.

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Иң әүәл бар эштәр ҙә айырым мәктәп эсендә башлана. Мәктәптә иң әүҙем һәм һәләтлеләрҙән һаналған уҡыусылар артабан ҡала һәм республика кимәленә сығыу мөмкинлеген ала. Был уйындар ойоштороуға ғына ҡағылмай, шул уҡ "Кесе академия" ойошмаларына байтаҡ уҡыусыларҙы йәлеп итеп була.

**▸ Һуңғы йылдарҙа беҙҙең йәмәғәт ойошмаларының эше бер ҡалыпҡа һалынды, ул, башлыса, мәҙәни саралар, төрлө байрамдар уҙғарыуҙан ғибәрәт. Йәмәғәт ойошмаларының башҡа өлкәләрҙәге мөмкинлектәре иҫәпкә алынмай түгелме һуң?**

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Йәмәғәт ойошмаһы башҡа күп мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнаша ала, әлбиттә. Мәктәптәребеҙҙе башҡорт теле уҡытыусылары менән тәьмин итеү мәсьәләһен алайыҡ. Бөгөн ҡала мәктәптәрендә ауылдарҙан килгән башҡорт теле уҡытыусылары эшләй, һәм уларҙың ҡалала йәшәү шарттары һәйбәт түгел. Шул уҡ ваҡытта ошо предмет буйынса маҡсатлы йүнәлтмәләрҙе үҙебеҙҙең ҡала башҡорттары балаларына биреү күпкә отошлораҡ булыр ине. Педуниверситетҡа йәиһә университетҡа ошо рәүешле уҡырға инергә теләүселәрҙе етерлек кимәлдә таба алыр инек.

**Шәмсулла Хәбибрахманов:** Әлегерәк шундай маҡсатлы йүнәлтмәләр ауыл уҡыусыларына 30 процентҡа тиклем бирелһә, хәҙер ҙә 20 процент тәшкил итә. Әммә былдай урындарға Өфө ҡалаһынан бер генә уҡыусы ла дәғүә итә алмай. Мәғариф органдары етәкселәре ҡала башҡорттары ҡоролтайҙарының ошо мәсьәлә буйынса әлеге тәҡдимен Хөкүмәт ҡарамағына сығарһын ине.

**Наилә Буранғолова:** Мин үҙем байтаҡтан бирле баш ҡалабыҙҙың Дим районында башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләгәс, әле күтәрелгән проблемаларҙы яҡшы беләм. Миңә бер үк ваҡытта район ҡоролтайы етәксеһе вазифаһын үтәргә тура килә, шуға коллегаларымдың хәл-торошон, кәйефен белеп торам. Дөйөм алғанда, етәкселәр урындағы башҡорт ҡоролтайҙары менән артыҡ иҫәпләшеп торорға теләмәй. Күп осраҡтарҙа йәмәғәт ойошмаһының даими урыны, айырым телефоны, компьютеры булмай, ә был эштәребеҙҙе әүҙемләштерергә ҡамасаулыҡ итмәйме ни? Әүҙем йәмәғәтселәрҙең дөйөм эш өсөн күпме көс һәм ваҡыт сарыф итеп тә, бер ниндәй ҙә өҫтөнлөгө булмауын күреп торған йәштәрҙе йәмәғәт эштәренә йәлеп итеү ауырлашасаҡ. Ни хәл итәһең, 1995 йылдан бирле йәмәғәт эштәре менән әүҙем шөғөлләнһәм дә, әлегә тиклем шәхси фатирҙа йәшәү мөмкинлегем юҡ. Шуның өсөн район ҡоролтайҙарының абруйын, урындарҙағы статусын күтәреү тураһында ла ҡайғыртырға кәрәктер. Ә йәштәрҙе барыбер йәмәғәт эшенә ылыҡтырырға кәрәк, һәм беҙ үҙебеҙҙең башҡарма комитет янында йәштәр советын булдырырға ҡарар иттек.

Тағы ла бер проблема - район кимәлендә башҡорт етәкселәренең аҙ булыуы. Йәмәғәт ойошмаларына таяныс ролен үтәп, үҙҙәре янына йәш кадрҙарҙы туплаусылар булмағас, күпкә өмөт итеүе ҡыйын. Шул арҡала ҡәҙимге сараларҙы ойошторғанда ла, ҡоролтайға әҙерлек эштәрен алып барғанда ла бар ауырлыҡты үҙ иңеңә һалырға мәжбүр булаһың. Ә өҫтән тәғәйенләп ҡуйылғандарға артыҡ ышанып булмай, сөнки уларҙа рухи ынтылыш самалыраҡ була. Шуға күрә ҡоролтай эшенә энергиялы, рухлы йәштәрҙең үҙ теләге менән килеүен хупларға ғына ҡала.

**▸ Һеҙ бик мөһим проблема ҡуҙғатаһығыҙ. Башҡорт милли кадрҙарын үҫтереү I һәм II ҡоролтай ҡарарҙарына ингән, әммә ҡоролтайҙар эшендә үҙен күрһәтеп тә, үҙенең һәләтенә һәм булдыҡлылығына торошло карьера эшләй алған күпме шәхестәребеҙҙе беләһегеҙ? Беҙ ни өсөн лидерҙар үҫтерә алмайбыҙ?**

**Наилә Буранғолова:** Ваҡытында беҙ сәнғәт академияһынан, махсус уҡыу йорттарынан төрлө белгестәрҙе саҡырып, уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү өсөн мөмкинлек булдыра инек. Хәҙер миңә дәғүә белдерәләр: "Ни өсөн һеҙҙекеләр фәлән эште белмәй, фәлән талапҡа яуап бирмәй?" Ҡулайлаштырыу тип, эшләп килгән ижади түңәрәктәрҙе ябып бөткәс, һәләттәрҙе ҡайҙан алайыҡ һуң? Бар нәмә лә оҙайлы һәм маҡсатлы эш һөҙөмтәһендә генә барлыҡҡа килә бит. Һәләтлеләрҙең, теләге һәм ынтылышы булғандарҙың урынын отчетты ваҡытында һәм шәп итеп төҙөй алыусылар биләй башланы түгелме ни? Былдай "етәкселәр" йәмәғәтселек эшмәкәрлегендә юҡ, тип әйтеп булмай. Бик әүҙем, эшлекле йәш уҡытыусыны етәксе итеп тәҡдим иткәйнек, беҙгә уҡытыусылар кәрәкмәй, тип кенә яуапланылар. Тимәк, булдыҡлы, ғәмәли эштәрҙе ойоштора белеүсе кәрәк булмағас, йәмәғәтселек эшендә "идара итә белеүселәр" өҫтөнлөк аласаҡ. Тағы ла бер мөһим проблема тураһында әйтмәйенсә булмай. "Шәжәрә" байрамы булһынмы, башҡа берәй сарамы, аҙмы-күпме аҡса кәрәк була. Ҡоролтайҙың аҡсаһы юҡ, ә байрамды барыбер беҙгә әҙерләргә тура килә. Шунан беҙ эшҡыуарҙарға һоранып барырға мәжбүр булабыҙ. Быны етәкселәребеҙ белеп ҡалһа, аҡса һорап йөрөгәнебеҙ өсөн шелтәләй, тыя башлай. Ярҙам булмағас, беҙ нисек эшләргә тейешбеҙ һуң?

**Мирхәт Ҡаҙарғолов:** Ҡоролтайға делегатлыҡҡа кандидаттар теркәү барғанда ла ошондайыраҡ хәлдәрҙе күҙәтергә була. Әйтәйек, район территорияһында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән милләттәшебеҙ беҙгә килә лә, бизнесы хаҡында һөйләй башлай, үҙенең ҡоролтайға делегат итеп һайланырға тейешлеген иҫбат итергә тырыша. "Район ҡоролтайына нисек ярҙам иттең?" - тип һораһаң, ләм-мим. Әлбиттә, етәксенең хакимиәттә эшләүе ҡоролтай ойошторған сараларҙы уҙғарыу йәһәтенән уңайлыраҡ. Ғөмүмән, район хакимиәттәре йәмәғәт ойошмаһы эшенә булышлыҡ итеү маҡсатында уны йыйылып эшләр урын менән тәьмин итеү, компьютер техникаһын алырға ярҙам

Ҡорт күсе кеүек гөжләп торған халыҡ араһында тегеләй ҙә былай йөрөй торғас, буш урын табыуыма өмөтөмдө өҙөп, бер мөйөшкәрәк изәнгә ултырып, йылы батареяға арҡамды терәнем дә, йоҡомһорап, күҙҙәремде йомдом. Кеше ҡыйынлыҡҡа тиҙ яраҡлаша тигәндәре дөрөҫтөр инде, айҙан артыҡ асарбаҡ тормошона күсеп, тимер юл вокзалында төнәп йөрөйөм. Кеҫәмдә бер тин аҡсам булмаһа ла, нисектер, йән аҫырайым. Хәйер, ил өҫтөндә сыпсыҡ үләме ни? Буфет өҫтәлдәрендә тороп ҡалған икмәк киҫәктәрен пакетыма тултыра һалам, буш шешәләр ҙә байтаҡ ҡына йыйыла. Ҡасанға тиклем һуҙылыр был мәғәнәһеҙ көнкүреш? Дальвосымдан аҡса килһә, ҡотолормон һымаҡ. Көн һайын почтаға барып әйләнәм. Улым пенсиямды йыйыштырып, үҙенән ҡушып, юллыҡ аҡса һалып ебәрә алһа ярай ҙа. Эй, замана! Сахалинға ҡайтып етеү өсөн генә әллә күпме аҡса кәрәк. "Их, мин, ҡартлас, тауыҡ баш!" - тип эш үткәс үҙемде-үҙем әрләгән булам. Юрғаныма ҡарап аяғымды һонһам, тыуған тупрағыма үлмәҫ элек ҡайтып әйләнәйем әле, тип ике-өс йыл буйы һумлап йыйған аҡсам баралы-ҡайталыға етә ине лә бит. Йәштән уйламай, аҡса туҙҙырыу ғәҙәте ҡаныма һеңгәс, нимә эшләйем? Бала саҡтан уҡ аҡыл менән эш итә торған ғәҙәтем юҡ ине. Дембель мәле яҡынлашыр алдынан часыбыҙға килеп, шахтаға эшкә ҡалырға димләп йөрөгәстәр, риза булып, торҙом да ҡалдым. Хеҙмәттәштәрем Әхмәҙинур, Мөхтәр, Зиннур яңылышҡанымды аңлатырға тырышып ҡараны, тыңламаным. Аҡсаны меңәрләп эшләп алып, фыртым ғына ҡайтып төшһәм... Әтлек-һарына ашарға, әсе ҡатыҡ һемерергә ни бысағыма ҡайттым икән. Диңгеҙбай кеүек шахтер булып ҡына ҡалмай, тип үкенерһегеҙ әле, йәнәһе. Эйе, ысынлап та, ике-өс йылдан затлы кейемдәр кейеп, кеҫәлә ике "Волга"ға етерлек аҡса менән ҡайтып төштөм. Атай-әсәйгә лә, ҡусты-һеңлеләргә лә бүләктәрҙе мул ғына алдым. Әсәй баштағы балаһының иркен йәшәүен күреп ҡыуанһа ла, мин дуҫ-иштәрем менән аҡсаны уңлы-һуллы туҙҙырып, көн һайын эсереп ҡайтҡылағас, көйәләнә башланы. "Ситтән йыйын әтрәгәләмдәр менән аралашып, аҙып-туҙып йәшәргә өйрәнгәнһең, ебәрмәйем бер ҡайҙа ла", - тип ҡырт киҫте. Атайымды ла тыңламаным. Йәш саҡта үҙ һүҙлерәк инем шул. Атай менән әсәйгә Алыҫ Көнсығышта ҡатыным менән улым йәшәгәнлеген әйткәс, улар ҙа китергә тигән теләгемә ҡаршы төшмәне. Юлға еҙнәмдән аҡса алып биреп тороп, ҡустынәстәр менән оҙаттылар...

Өйләнеп, ғаилә тормошо ҡороп алып китеүем уйламағанда ғына булды. Пян исемле кореец ҡарт менән дуҫлашып алдыҡ. Үҙе башҡортҡа ла оҡшап торғас, ҡан-ҡәрҙәштәрен һағынып-юҡһынып йөрөгән кешегә етә ҡалды шул. Ул ҡарауылсы булып эшләй ине. Бер көн эштән һуң бер яртыны бушатҡас, мунса инерһең, тип, өйөнә алып ҡайтты. Кеҫә ҡалын булғас, ҡустәнәсте етерлек алдым. Мунса инеп, парланып сығыуға, өҫтәлдә мул ғына табын әҙерләнгән. Спиртты бер стакан тултырып һуҡтым да, тотондом табалағы һимеҙ итте йыпырырға. Шулай аппетит менән ашап-эсеп ултырһам, аңғармай һөйләшеп эште боҙҙо Пян ҡарт. Ашаған ризығымды таҫҡа ауҙарттырҙы. "Үҙегеҙҙә лә һимертеп һуяһығыҙҙыр, ахыры, эт итен бик яратаһың икән", - ти был. Вәт, ҡәһәр һуҡҡан кореец, башҡортто үҙ халҡына тиңләй. Минең бит ата-бабам йылҡы ите, ҡаҙы ашап, ҡымыҙ эсеп, ҡорт балы менән генә һыйланып көн күргән... Беҙ аслыҡ ваҡытында ла үлән ашаһаҡ ашаныҡ, мосолман өсөн харам ризыҡтарҙы ауыҙ итмәнек. Шуларҙы уйлағайным, тотондом уҡшып-уҡшып ҡоҫорға. Ауырып китте, тип уйланылар, күрәһең: хужабикә лә, Пян ҡарт та, ун алты йәштәр тирәһендәге ҡыҙҙары ла ни алып, ни бирергә белмәй йүгереп йөрөйҙәр. Уҡшығанда йәш ҡыҙ маңлайымдан баҫып тотоп тора. Таҫтамалды һыуыҡ һыуға манып, маңлайыма бәйләй. Етмәһә: "Выздоравливай, Димка, ты мне нравишься", - тип тә ысҡындырҙы был. Тағы ла бер стакан эсеп, үҙемә оҡшаған ризыҡтан ауыҙ иткәйнем, тәҙәлгән һымаҡ булдым. Эсеп ултыра торғас, Пян ҡарт тәнтерәкләй-тәнтерәкләй төпкө бүлмәгә сығып китте. Ә йәш ҡыҙ һаман да эргәмдә бөтөрөлә. Егерме дүрт йәшлек егеткә ҡапма-ҡаршы енестәр менән аралашырға ошоға тиклем форсат тейгәне булмағас, күңел уларға ҡарата май шәм кеүек ирергә генә тора. Үҙе лә һырлығып, ҡуйыныма инергә әҙер йөрөгән һымаҡ тойолғас, эскән баш менән күп уйлап торманым, ҡосаҡлап алдым да яттым. Шул көндән алып ирле-ҡатынлы булып йәшәй ҙә башланым. Бер йылдан һуң ир бала тыуғас, Алыҫ Көнсығышта йәшәүемде иҫәпкә алып, Дальвос тип исем ҡуштым. Ошо баланан башҡа бала тәҫө күреү бәхете тәтемәне беҙгә. Икенсе бала ҡорһағында көйө үлгәс, операция яһап алдылар. Мин дә улар телен йүнләп белмәгәс, ул




башҡортса аңламағас, Дальвосҡа урыҫ телен өйрәткән булдыҡ та булыуын, барыбер өс телдең береһендә рәтләп һөйләшә алмай. Уҡыу ғинаһының да рәте булмағас, яҙа-йоҙа ун беренсене бөттө лө үҙемдең һыяныма эшкә килде. Хәҙер бөтә ил эскелеккә бирелгән заманала ул да хәмер тигән нәмәне күрһә, күҙҙәре уйнап китә...

Телеграммамды алғас, пенсиямды туҙҙырмай ғына һалып ебәрһә ярай ҙа. Бөтә ышанысым берҙән-бер улымда. Аңлаһа, ул тип ҡайтырға ынтылдым да инде. Әсәһе бынан дүрт йыл элек, ашҡаҙанына операция яһатҡандан һуң, биш ай түшәктә ятты ла фани донъя менән хушлашып та ҡуйҙы. Үлер алдынан: "Их, Дальвосыма килеш алып биреп, ейәндәремде һөйөп өлгөрә алманым бит", - тип уфтанғаны күҙ алдымда. Хәҙерге йәштәрҙе тиҙ генә өйләндереп буламы ни? Утыҙ туғыҙ йәше тулып килһә лә, үҙ мөрйәһенән төтөн сығармай, иҫәнгерәп тик йөрөй. Хәйер, миңә оҡшап, моңһоҙораҡ, мәнһеҙерәк булған шул. Үҙем дә бит йүнһеҙлегем арҡаһында ошо көнгә төшөп, вокзал тупһаһын тапайым. Юллыҡ аҡсамды әҙәм рәтле генә тотонорға була ине бит миңә.

Был юлы таяныр кешеләрем дә юҡлығын белеп торҙом. Ата-әсәм донъяла күптән юҡ, эсеп йөрөп, шул әруахтарҙың ҡәберен дә барып күрмәй китеп барам. Риза булып ятмайҙарҙыр улар. Ҡайтып, ҡәберҙәренә берәр ус тупраҡ та һала алманым бит, исмаһам.

Кемдер яурыныма ҡағылғандай булғанға күҙҙәремде асһам, ни күҙем менән күрәйем, Харрас ағайым йылмайып баҫып тора.

- Әле генә Төмәндән килеп төштөк тә, буш урын эҙләп, еңгәң менән тегеләй ҙә былай йөрөп ятһаҡ, һине сырамыҡтандай иттем. Улмы, түгелме, тип, ҡағылырға баҙнат итмәй торҙом әле, - ти ағайым. - Йә, тыуған ергә ҡайтып барышмы, ҡустым?

- Юҡ, мин ауылда булып, китеп барам, - тинем. Харрас ағай мин ҡайтҡанда Төмәндәге улына ҡунаҡҡа киткәйне, шуға ла дуҫ-иштәрҙе һыйлап, юллыҡ аҡсамды туҙҙырып бөткәс, йәшәгән төйәгемә ҡайтып китә алмай аңҡы-тиңке килеп йөрөүемде белмәй. Ул - атайымдың бер туған ҡустыһы. Элек фыртым йәшәгән саҡта аралашып бармаһам да, әле, башҡа күҙ терәр кешем булмағас, үҙ хәлемде белгертеп, барыһын да һөйләп бирергә тура килде.

Тыңлап бөткәс, ағайым оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы.

- Үҙебеҙ ҙә юлаусы кеше бит, - тине ул. Бында, Өфөлә, аҡса табып биреп булмай инде. Берәй әмәлен табырбыҙ, кире ҡайтмай булмаҫ, - тип еңгәйгә ҡарап ҡуйҙы. Уныһы, ризалығын белгертеп, баш ҡаҡты. Урын-еренә еткереп, семәрләп эшләнгән тәҙрә-кәрнизле һап-һары ҡарағай йорттоң ихатаһында беҙҙе Харрас ағайымдарҙың төпсөк ҡыҙы Гөлмәҙә менән кейәүе ҡаршы алды. Өс бүлмәле өй ҡалалағыса затлы әйберҙәр менән урыны-еренә еткереп йыһазландырылған. Ихатала бәләкәй йорт, ул солан аша оло йорт менән тоташа, тимер башлы һарай, мунса, гараж, келәт. Ишек алдында йөрөгән ҡаҙҙарҙың ҡаңҡылдашыуы, тауыҡтарҙың ҡытҡылдашыуы, һыйырҙарҙың мөнрәүе - барыһы ла тәбиғи, күңелгә рәхәтлек, ҡәнәғәтлек тойғоһо өҫтәгән һымаҡ. Ағас йорттоң һауаһы ла үҙенсә, саф. Ә мин, ғүмерем буйы һуҡыр сысҡан шикелле ер соҡоһам да, ике бүлмәле еүеш кирбес йортта тонсоғам. Нисек тә шул шыҡһыҙ йортҡа ҡайтып тәгәрәргә кәрәк, ни тиһәң дә, үҙ мөйөшөң - үҙ мөйөшөң инде. Туғандарҙа һин өс көнгә генә ҡәҙерле, артабан - муйнаҡ. Уйланып ултырғанымда: "Диңгеҙбай ағай, мунсаға бар", - тинеләр. Мунса тигәс, ҡыуанып, һикереп торҙом, сөнки вокзалда йөрөгәндә йүнләп йыуынып та булмағас, еҫләнә лә башлағайным. Ике бүлмәле аҡ мунсала йүкә миндеге менән сабынып, таҙарынып сыҡҡас, тәнем еңеләйеп, бөтөнләйгә икенсе кешегә әйләнгән һымаҡ булдым. Мунсанан сығыуға, табын әҙерләгәндәр. Харрас ағайым менән үҙҙәре әҙерләгән зәм-зәм һыуынан берәр стаканды түңкәргәс, ағайҙың да, минең дә тел сиселде.

- Йәш сағыңда бик фыртым булдың, ҡустым, - ти ағайым. Ҡайтһаң, дуҫ-иштәрең, еҙнәң менән фарсит итеп эсә-эсә лә, беҙгә инеп һөйләшеп тә ултырмайынса, китә лә бара торғайның. Шул саҡта уйлап ҡуя торғайным, бер саҡ был малайҙың иҫенә төшөр төшөүен, ну һуң булыр, тип. Уйым раҫҡа тура килә булһа кәрәк.

-Йә-йә, - тип араға ҡыҫыла еңгәм, - әллә ниҙә бер ҡайтҡан ҡустыңды улай битәрләп ултырма инде. Әллә ҡабат аралаша алаһығыҙ, әллә юҡ, тигәндәй, һигеҙенсе тиҫтәне ваҡлай башланың да инде.

-Битәрләү түгел, ҡустының яҙмышы өсөн ҡаҡшаныу был. Төптән уйлаһаң, ул бит ирекле каторжан. Элек ул яҡҡа тотҡондарҙы һөргөнгә ебәрә торғайнылар, ә хәҙерге йәштәр үҙҙәре теләп шунда китә. "Эт - туйған ерендә, ир - тыуған илендә" тигән мәҡәлде хәтерҙән сығарып ебәрергә ярамай ҙа бит. Мине былай яҙмыш ҡайҙарға ғына ташлаһа ла, тыуған еремде хәтеремдән сығарманым. Үҙең беләһең дә инде, - тип әбейенә ҡарап ҡуйҙы Харрас ағай. - Утыҙ етенсе йылда нахаҡҡа төрмәгә ултыртҡастар, һин һәм тыуған төйәк тип, ике мәртәбә ҡасып ҡайттым. Үҙем йылғыр ҙа, сос та була торғайным шул. Һаҡсыларҙың ауыҙын астырып ҡаса ла китә инем. Тотолған һайын, срокты өҫтәп торалар. Һуғыш башланып китмәһә, йә аталар, йә мәңгегә башты төрмәлә серетәләр ине. Үҙем теләп киттем һуғышҡа һәм шунда күрһәткән батырлыҡтар ғына ҡотҡарып алып ҡалды ағаңды, - тип күкрәген тултырып орден-миҙалдар тағып төшкән фотоһына ҡарап алды. Тағы ла бер стакан төшөргәс, мин батырсылыҡ итеп, нисегерәк һаҡсыларын алдатып ҡасҡаны тураһында һөйләүен һораным.

- Башыңа төшһә, төлкөнән хәйләкәрерәк, һайыҫҡандан һағыраҡ эш итәһең. Бесән ваҡыты етеп килә. Ә беҙ көслө һаҡ аҫтында Ишембайҙан Өфөгә нефть торбаһы һуҙабыҙ. Көндө төнгә ялғап эшләтәләр. Эңер төшөп килә, зонаға алып ҡайтыр саҡтары ла яҡынлаша бер саҡ. Һаҡсы тәмәке тоҡандырырға эйелгән саҡта, мин торба эсенә ин дә кит. Йыуан торба эсенән шыуышам, имгәкләйем. Ә үҙем икенсе башына тиклем күпме шыуышырға кәрәк икәнлеген дә белмәйем. Торба эсендә тынсыу, тын алыуы ауыр. Кейгән генә кейемем тимер тутына һап-һары булды. Хәлһеҙләнеп, ҡара тиргә баттым. Егерме-утыҙ метр шыуышам да хәл алырға туҡтайым. Шулай ярты сәғәт тирәһе торба эсенән барғандан һуң, икенсе осона сығып еттем. Ҡомһоҙлашып, саф һауа һуларға тотонғас, бер аҙ хәл ингәндәй булды. Тирә-яҡ ҡараңғы. Иғтибарлап ҡараным да, шикләнерлек нәмә булмағас, торбанан сығып, ҡағынып-һуғынып алдым һәм яҡында ғына йымылдашҡан уттарға ҡарап атланым. Ҡайтып, еңгәңә бесән эшләшеп, кәбән ҡойоп йөрөгәндә тотоп, кире алып киттеләр. Икенсе мәртәбә эш былайыраҡ килеп сыҡты. Ул заманда машина кеүек нәмә һирәк булғас, конвоирҙар начальнигы ат менеп йөрөй торғайны. Уны тегендә-бында йөрөтөргә мине тәғәйенләнеләр. Электән ат араһында мәж килеп үҫкән кеше, был эшкә ихлас тотондом. Аттарҙы йыуып, таҙартып торам, холоҡтарын өйрәнәм. Төпкә еккән туры аттың сәйер ғәҙәте бар: тау түбәненә таба башын бер тартып, бер бушатып барһаң, тиҙлеген арттырғандан-арттыра. Бер саҡ шулай оҙон ғына тауҙы төшөп барабыҙ, миндә ҡасырға тигән уй тыуҙы бит. Тегеләр - был юлы икәү үҙ-ара ғәмһеҙ генә һөйләшеп баралар. Алға иғтибарлап ҡарайым. Бына боролма. Ҡыуаҡлыҡ. Дилбегәне аттарҙың һырты өҫтөнә ташланым да һикерҙем һәм йылт итеп ҡыуаҡлыҡҡа инеп киттем. Артымдан ата башланылар. Ләкин ул миңә ҡурҡыныс түгел: исем өсөн генә атҡандары күренеп тора. Имен-аман ҡайтып, егерме көн тирәһе еңгәң эргәһендә йәшәп ҡалдым, тағы ла тотоп алып киттеләр. Тотҡонда йәшәһәм дә, нәҫел арттырырға тырыштым инде, - тип Харрас ағай еңгәйгә ҡарап көлөмһөрәп ҡуйҙы. Тик шул осорҙа тыуған Ғәббәсебеҙ аҙманыраҡ булып сыҡты. Һинең кеүек оҙон аҡса эҙләп, тыуған төйәген ташлап, әллә ҡайҙа, Төмән яғында нефть эҙләп тик йөрөй...

Шулай ҙа ағайым ярҙам итте миңә. Юл хәрезенә тип, өс һыйырының береһен һатты. Мин уға рәхмәттәр әйтә-әйтә юлға ҡуҙғалдым. Бер ауыҙ бешкәс, самалап тотоноп, йәшәгән төйәгемә ҡайтып етермен, тип уйлайым.

Мине оҙатырға ишек алдына Харрас ағайымдың бөтә ғаиләһе сыҡты. Уларҙың киң күңелле булыуы хистәрҙе нескәртеп ебәрҙе. Һуңғы мәртәбә (үҙемә шулай тойола) бала саҡтан таныш тауҙар-ҡаяларға, бормаланып уйһыҙ ғына аҡҡан Ағиҙелгә ҡарайым. Ирекһеҙҙән, күҙҙән йәштәр сыға. Ә йәш саҡта бер нәмә лә уйламай китә лә бара торғайным. Был юлы ауыр миңә тыуған төйәгемдән айырылыуы. Ҡартлыҡта үлем йыш иҫкә төшә. Ә минең башымды бер уй телгеләй. Поезға ултырғас та күңел тынысланманы. Тәгәрмәс тауыштары: "Һин - ирекле каторжан", - тип таҡылдаған кеүек. Пароходҡа ултырғас та, бортҡа килеп бәрелгән тулҡындар ҙа ошо һүҙҙе ҡабатлағандай булды. Эйе, мин ирекле каторжан. Мине берәү ҙә Сахалинда бәйләп тотмай. Әммә, иреклемен, тип, ҡайҙа бара алам һуң мин хәҙер?! Тыуған төйәгемә ҡайтһам да, һөрһөп бөткән, етмешкә етеп барған ҡарттың кемгә кәрәге бар? Һайлап алған яҙмышыма буйһоноп, тереклек итергә генә ҡала. Хатта "Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән дә ат башы", тигән йырҙы йырлап зарлана ла алмайым, сөнки мине тыуған еремдән берәү ҙә көслөк менән китергә мәжбүр итмәгән.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Билдәле булыуынса, мин бөйөк шағир Рәшит Назаровтың әҙәби мираҫын туплау, баҫтырып сығарыу, пропагандалау, йыйып әйткәндә, халыҡҡа еткереү эштәре менән бик күп йылдар шөғөлләнәм. Рәшит Назаровтың ижадын белгәндән, бигерәк тә уның яҙмаларын туплап, китаптарын сығара башлағандан бирле, шағирҙың әҫәрҙәрен рус һәм башҡа телдәргә лә тәржемә итеү, йыйынтыҡ итеп сығарыу тураһында уйлана, хәстәрлек күрә башланым.**

# ҠАЙҘА ШАҒИР ЙОНДОҘО?

## Йәки Рәшит Назаров әҫәрҙәренең тәржемәһе хаҡында

Башҡорт, рус телен бер дәрәжәлә һәйбәт белгән билдәле журналист Исмәғил Мәхмүтов менән улым Азаттан шағирҙың ҡайһы бер әҫәренең һүҙмә-һүҙ (подстрочный) тәржемәләрен эшләттем. Уларҙың ҡайһы берҙәрен һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа урыҫ телендә нәшер ителгән "Бельские просторы" журналының тәүге мөхәррире, үкенескә ҡаршы, арабыҙҙан бик иртә киткән шағир Юрий Андриановҡа күрһәткәс-уҡытҡас, ул был шиғырҙарҙы мотлаҡ тәржемә итәсәген белдерҙе, оҙаҡ ҡына йөрөтөп, Рәшит Назаровтың тиҫтәгә яҡын "урыҫлашҡан" әҫәрҙәрен алдыма һалды. Мин уларҙы уҡырға өйгә алып ҡайттым. Төп нөсхә менән сағыштырып танышҡас, тәржемәсенең шағир асылына, тәбиғәтенә инә алыуын, образлылығын, афористик фекерләү ҡеүәһен юғалтмаҫҡа тырышыуын, йыйып әйткәндә, тик "рәшит"сә әйтергә ынтылыуын һәр шиғырҙа күрҙем. Әлбиттә, иҫкәрмә-тәнҡит тә байтаҡ әйттем. Шағир-тәржемәсе уларҙың бөтәһен дә тип әйтерлек ҡабул итте, яңынан эшләнгәс, улар бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты. Юрий Андриановтан тыш, Р. Назаровтың ҡайһы бер шиғырҙарын Александр Филиппов, Ғәзим Шафиҡов кеүек билдәле шағирҙар ҙа урыҫ теленә тәржемә итте. Асылда, уларҙың да нисбәтле, шағирға тиңләшергә теләп эшләгән ижади тәржемә-тәжрибәләре хуплауға лайыҡ булды, тип уйлайым.

Ниңә һөйләйем әле был хаҡта? Быға сәбәпсе: аҙнаға бер тапҡыр нәшер ителгән күләмле "Истоки" гәзитенең тулы бер битендә (11 ноябрь 2009 йыл, 45-се һан) Рәшит Назаровтың 19 шиғырының тәржемәләре баҫылғайны. Уны башҡортсанан урыҫ теленә Айҙар Хөсәйенов ауҙарып булашҡан. "Ауҙарып булашҡан" тип әйтәм, сөнки мин ул тәржемәләрҙән яңы алымдар, яңы ритм-үлсәүҙәр менән төрләнгән фәлсәфәүи Рәшит Назаров шиғриәтенең бейеклектәрен һәм бөйөклөктәрен күрмәнем. Киреһенсә... Хәйер, ниңә күп һүҙ: сағыштырыуҙарға күсәйек. Шағирҙың 1962 йылдың 11 майында ижад ителгән "Йөрәк" исемле атаҡлы шиғырын кемдәр генә уҡымаған. Күптәр хатта уны яттҡа белә.

### Йөрәк

**Йыртып астым күкрәгемде,**
**Йолҡоп алдым йөрәгемде**
**Һәм, йомарлап устарыма,**
**Илттем уны дуҫтарыма,**
**Илттем уны һиңә, йәнем,**
**Тик күрмәнең ниңә, йәнем?..**

**Хурланып мин шул саҡ бик тә,**
**Йөрәгемде аттым күккә,**
**Осто йөрәк, осто йөрәк**
**Йондоҙҙарҙан бейегерәк.**

**Йәнем! Әгәр сыҡһаң тышҡа**
**Таңын, ҡара көнсығышҡа, -**
**Бер йондоҙ унда нур һипһә,**
**Һәм хистәрең дөрләп китһә,**
**Бел: был йондоҙ - минең йөрәк,**
**Тик инде ул бейегерәк.**

*Ә хәҙер тәржемәгә күҙ һалайыҡ:*

И разорвал я грудь - гляди!
И вырвал сердце из груди!
Сдавил его руками я,
Отнес его моим друзьям...
Отнес тебе, моя любовь.
Чтож не увидела его!
Любовь моя! Ночной порой
Взгляни, взгляни - над головой
Одна, одна звезда говорит
Она с тобой заговорит.
То сердце бедное - поверь.
Как высоко оно теперь.

Атаҡлы шиғырҙың тәржемәлә данлы исеме ҡайҙа? Әҫәр бит һөйөүҙең ниндәй ғәжәп, илаһи, хыялый, фантастик һәм шул уҡ ваҡытта ҡаһарманлыҡҡа әйҙәүсе көс булыуы менән бергә, егет мөхәббәтенең ғорурлығын, мәңгелеген раҫлай. Күккә осҡан йөрәк - шуны нурландырыусы йондоҙ: шағирҙың образы, символы. Быны күрмәү, тоймау - шағир әҫәрен бөтөнләй аңламау. Шулай булмаһа, шағирҙың:

"Хурланып мин шул саҡ бик тә,
Йөрәгемде аттым күккә,
Осто йөрәк, осто йөрәк
Йондоҙҙарҙан бейегерәк", - тигән юлдары тәржемәлә бөтөнләй төшөрөп ҡалдырылмаҫ, 17 юллыҡ шиғыр 12 юлға әүерелмәҫ ине, тип әсенеп уйланаһың.

Рәшит Назаровтың фәлсәфәүи тәрәнлек йөкмәткеле мөһабәт образлылығын тәржемәлә, әҙәбиәттә образлылыҡтың лексик сараһы булараҡ та үҙенсәлекле, уҡыусыларға киң билдәле "Йәшен" исемле шиғыры бар. Был әҫәрҙә шағир омонимдарҙы, йәғни бер төрлө әйтелеп тә, төрлө мәғәнә бирә алған һүҙҙәр - рифмаларҙы уйнатыуҙы күҙ уңында тотоп ижад иткән. Каламбурҙарға һәм һүҙ аймылыштырыуҙарға ҡоролған мөхәббәт хаҡындағы тәрән мәғәнәле был шиғырҙы һоҡланмай, тулҡынланмай уҡыу мөмкин түгел:

### Йәшен

**Мөхәббәт ул - әйтерһең дә, утлы йәшен,**
**Һанап, һорап тормай һис бер кемдең йәшен,**
**Һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен.**
**"Көйҙөрөр", - тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин - йәшен,**
**Тик аҙаҡтан ҡоя күрмә күҙең йәшен!**
**Мөхәббәт ул - әйтерһең дә, утлы йәшен...**

Был шиғырҙы, бәлки, тәржемә итеп тә булмайҙыр. Тәжрибәләр шуны күрһәтә: үҙ халҡының тарих, рух һәм тел байлыҡтарын йәненә һеңдергән, поэтик һәм образлы уй-фекерҙәрен таланты бейеклегендә күтәреп дөйөмләштерә алған шағирҙар әҫәрен тәржемә итеү иң ҙур маһирлыҡ, оҫталыҡ талап иткән нескә, мөкәтдәс һөнәр-ижад булған. Шулай булып ҡала. Хәҙер быны ошо шиғырҙың урыҫ телендәгеһен ҡарайыҡ:

Любовь - так это молния, скажи,
Не спрашивая возраста души,
И старика, и молодого оглушит,
Боишься - спрячься где-нибудь в глуши.
Но слез не лей и счастья не ищи,
Любовь - так это молния, скажи.

Әлбиттә, тәржемә юлға - юл, һүҙгә һүҙ ителәп торған нәмә түгел. Ул - иң ижади эш. Ун һигеҙенсе быуат шағиры В. А. Жуковский "Переводчик в прозе - раб, в поэзии - соперник", тип бик-бик дөрөҫ әйткән. "Соперник", тимәк, ярышыусы, йәки әҫәрен тәржемә ҡылған шағирға тиңләшеү, тиң булырға ынтылыу.

Ә ҡайҙа бында тиңләшеүгә ынтылыу? "Йәшен" булып китаптарында сыҡҡан, дәреслектәргә ингән киң билдәле шиғырҙың исемен төшөрөп ҡалдырыуҙамы? "Скажи-әйт" тигән кәрәкмәгән һүҙҙе өҫтәп, "...әйтерһең дә" - "как будто" тигән мәғәнәле сағыштырыуға иғтибар итмәүҙәме? Йәғни, "һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен" тигән һүҙҙәрҙе "и старика, и молодого оглушит" тип рифмалаштырыуҙамы? Шиғырҙа бит "ялмай" тип әйтелгән, тимәк, урыҫса мәғәнәһе "охватывает" или "захватывает целиком", ә инде "оглушить" һүҙе "шартлау, ҡолаҡ тондороу" тигәнде аңлата.

Һүҙ бит мөхәббәт хаҡында бара... Ә иң мөһиме, тәржемәлә, башта әйтелгән "йәшен" һүҙенең күп мәғәнәле омоним булыуын, алты юлдың һәр береһендәге яңы мәғәнәһен аңлатып биреү кәрәк ине. Шунан һуң ғына әҫәрҙең эстәлеген, һәр һүҙҙең асылын, урыҫсаға тәржемәһен тулыһынса белгәс-аңлағас ҡына, бөтә һәләтеңде һалып эшләгән тәржемәңде уҡыусыларға тәҡдим итеп ҡарарға ине. Ниндәйҙер үҙ маҡсатыңды иҫәптә тотоп, бөйөк шағирыбыҙ Рәшит Назаров ижадының яҡты балҡыған бейек йондоҙо бына шундай тәржемәләрҙән тонокланып ҡуймаһа ярар ине, тигән борсолоу баштан сыҡмай. Бына тағы ла бер тәржемә:

### Илайым

**Илар мәлдәр була. Иламайым!**
**Тештә ҡыҫып - түҙәм,**
**Тәндән ҡандар атылып сыҡһа сыға,**
**Тик йәш сыҡмай күҙҙән.**

**Бала саҡтан, ергә түгел, йәшем**
**Йөрәгемә тамды.**
**Һәм әрнетеп, ут шикелле, шунда**
**Мәңге дөрләп ҡалды.**
**Ләкин ғүмер илап йәшәгәндәр**
**Көнгә ҡарап көлһә, -**
**Мин илайым, йәште тигеҙ бүлеп**
**Йөрәк менән бергә,**
**Мин илайым шатлыҡ йәшен һығып**
**Бәхет менән бергә...**

*Быныһының тәржемәһе:*

Бывает время слез, но я не плачу.
Лишь скрежещу зубами всякий раз.
Пусть ранен - это ничего не значит.
Не льются слезы у меня из глаз.
Так с детства повелось, что мои слезы
Лились мне в сердце, как мечты, как грезы.

И до сих пор они горят во мне,
И вечно, вечно им во мне гореть,
И если кто смеется, как во сне,
Мне никогда такого не суметь.

"Илайым" тип исемләнгән был билдәле әҫәрҙең тәүге алты юллыҡ тәржемәһенә, ошо шиғырҙа әйтелгәнсә, "тештә ҡыҫып - түҙәм", ә инде уның да тағы ла исемһеҙ булыуынан, 15 юллыҡтан 10 юл ғына ҡалып, һуңғы строфаһы бөтөнләй ят шиғыр юлдарына әүерелеүенән "тик йәш сыҡмай күҙҙән" ... Дөрөҫөн әйтәйем, тәржемәләрҙе уҡып, исемһеҙ ҡайһы бер шиғырҙы Рәшит китаптарынан эҙләп таба, дөрөҫөрәге, таный алманым. Быныһын тәржемәсе намыҫына ҡалдырайыҡ...

Башҡорт шағиры Рәшит Назаровтың ниндәй шағир булыуы тураһында күп әйтелде, яҙылды, уға һоҡланыуҙар алда ла аҙ булмаҫ әле. Шағир ижады хаҡында яңы тикшеренеүҙәр, хеҙмәттәр яҙылыуына ла шигем юҡ.

Бындай шағирҙың әҫәрҙәрен урыҫ теленә тәржемә итеү ҙур ижади хеҙмәт, оло яуаплылыҡ ҡына йөкмәтеп ҡалмай, башта Рәшиттең ижадын бөтә яҡлап өйрәнеүҙе лә талап итә. Был эш тәржемәсенең тормош-ижад маҡсатына, намыҫ-выждан эшенә әүерелергә тейеш. Р. Назаров йәненә, ижадына кермәй, уның тел байлығын, әҫәрҙәренең яңы алым, үлсәм-ритмдарҙа ижад ителеүен өйрәнмәй, фәлсәфәһенең быҡаса булмаған бейеклектәргә күтәрелеүен тоймай тороп, ошо бейеклекте тәржемәлә нисек күрһәтеп булһын һуң? Ошо мәҡәләлә миҫалға килтерелгән йәнһеҙ-йәмһеҙ "тәржемәләр" менән бөйөк шағирыбыҙҙың бөйөк ижадын бик түбәнгә төшөрөп, хатта бөтөнләй юҡҡа сығарып ҡуймаҫбыҙмы? Башҡа телдә уҡыған уҡыусылар, һеҙ күккә сөйгән шағирыбыҙҙың йондоҙҙары ҡайҙа, тимәҫме? Был мине ныҡ борсой. Уҡыусылар ҙа быға битараф, вайымһыҙ ҡалмаҫ, тип уйлайым.

**Риф МИФТАХОВ.**

---

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## АВТОМОБИЛЬ

Хикмәт мәктәптә яҡшы уҡый. Мәктәбе өйҙәренән алыҫта урынлашҡанлыҡтан, Хикмәткә көн дә автобусҡа ултырып йөрөргә тура килә. Уның ҡыҙыҡһыныуҙары күп була. Шуларҙың береһе - автомобилдәр. Хикмәт иптәштәренә мәктәпкә барғандағы юлда осраған теләһә ниндәй машинаның марка һәм моделен әйтеп бирә ала. Уларҙың үҙҙәренең өйҙәрендә машина булмай. Был уны бер аҙ борсоһа ла, Хикмәт бер ваҡытта ла был хаҡта атаһына һәм әсәһенә ауыҙ асып өндәшмәй. Атаһы хеҙмәткәр булып эшләй, уның эш хаҡы дүрт кешелек ғаиләне аҫырарға саҡ-саҡ етә. Шуға ла атаһынан машина һатып алырға һорау аҡылһыҙлыҡ икәнен яҡшы аңлай Хикмәт. Ғаиләһен аҫырау өсөн бар көсөн һалып тырышҡан кешегә бындай үтенес белдереү рәхимһеҙлек булыр ине.

Шул уҡ ваҡытта уның менән бер кварталда йәшәгән синыфташы Әхмәттең мәктәпкә йәйәү йөрөүен дә аңлап етмәй Хикмәт. Бер ямғырлы көндө иптәштәре менән туҡталышта автобус көткәндә улар янынан ашыға-ашыға өйөнә ҡабаланған Әхмәтте күреп ҡала ла, уға: "Һыуланаһың бит. Әйҙә, хәҙер автобусҡа ултырабыҙ" , - тип өндәшә. "Рәхмәт, миңә бер урынға инеп сығырға кәрәк", - ти Әхмәт.

Был бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Шунан Хикмәт ҡыҙыҡһынып был хаҡта әсәһенән һорай. Әсәһе Әхмәттең ғаиләһен яҡшы белә. Уларҙың атаһы бынан бер нисә йыл элек үлеп ҡалған, әсәһе алты бала менән яңғыҙы тороп ҡалған. Ул кешеләргә өй йыйыштырып, балаларын астан үлтермәҫлек аҡса эшләй. Билдәле, Әхмәттең автобусҡа ултырмауының сәбәбе - аҡса юҡлыҡта.

Әсәһе һөйләгәндәр Хикмәтте тетрәндерә. Ә ул үҙҙәренең машинаһы булмауға борсолоп йөрөй тағы. Шунда Хикмәт уның менән бер ҡалала йәшәгән, баш осонда ҡыйығы, эше, аҙығы булмаған мөнәрләгән кешеләр тураһында уйлай. Ә уның ғаиләһендә барыһы ла насар түгел - бының өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт уҡый Хикмәт.

**Малай Бәйғәмбәребеҙҙең ошо хәҙисе тураһында алдан белгән булһа, үҙҙәренең машинаһы булмағанға ҡайғырып йөрөмәҫ ине:**

**"Үҙегеҙҙән юғары булғандарға түгел, ә түбән булғандарға ҡарағыҙ".**

✓ *Һәр ғаилә нигеҙендә мөхәббәт ятһа, унда үҫкән балалар бахыр була алмай. Ҙур батырлыҡтар ҡылмаһа ла, ул ата-әсәһен, туғандарын һәр саҡ ҡурсырға әҙер тора. Бындай бала, үҫкәс, илен дә, милләтен дә яҡлай аласаҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БИШЕК ЙЫРЫ...

## ауыртыуҙы баҫа

■ Канаданың Альберта университеты ғалимдары раҫлауынса, етлекмәй тыуған балалар өсөн музыка тыңлау файҙалы. Яғымлы көйҙәр ауыртыуҙы баҫа, һулышты һәм йөрәк ритмын нормалләштерә. Ваҡытынан алда тыуған сабыйҙарҙың ауырлығы бәләкәй була, шуға ла уларға медицина препараттары биреү ҡыйынлаша, ә еңелсә музыка хатта дарыуҙарҙы ла алыштыра ала, тип иҫәпләй белгестәр. Бының өсөн бишек йырҙары һәм классика ҡулайыраҡ.

■ Соя һәм унан яһалған аҙыҡ-түлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға, мускулдарҙы үҫтерергә ярҙам итә, тип һанала. Әммә Төньяҡ Айова (АҠШ) университеты ғалимдары иҫкәртеүенсә, 50 йәштән уҙған ҡатын-ҡыҙ организмына ул бер нисек тә йоғонто яһамай. Экспериментта 46 йәштән 65 йәшкә тиклемге 229 гүзәл зат ҡатнаша. Тикшеренеүҙәр тамамланыуға, уларҙың мускул һәм май массаһы үҙгәрмәүе асыҡланған.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иҫкәртә. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар (фенол антиоксиданттары) артерия стеналарын ҡан ҡуҙәнәктәре ултырыуынан ҡотҡара. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Насар яҡтыртылған бүлмә, хатта ҡояштан һаҡлаусы күҙлектәр кешене эгоист яһай. Быны Торонто университетының философия факультеты ғалимдары иҫбатлай алған. Улар өс тәжрибә үткәреп ҡараған. Беренсе тәжрибә күрһәтеүенсә, насар яҡтыртылған урындарҙа хеҙмәт итеүселәр аҡсаны күберәк алыу маҡсатында йыш ҡына хеҙмәттәштәрен алдау юлына барған. Икенсе һәм өсөнсө тәжрибәлә ҡатнашыусыларға ҡара күҙлектәр таратып бирелгән һәм улар парлашып компьютер уйыны уйнаған. Уйын ваҡытында ҡара күҙлекле уйынсылар үҙҙәрен эгоист итеп күрһәткән.

■ Иртәме, һуңмы, һәр тәмәке тартыусы ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфалана башлай. Бындай күнелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн даими рәүештә сәй йәки ҡәһүә эсергә кәрәк, тип белдерә швед ғалимдары. Эш шунда: сәй һәм ҡәһүә мейегә ҡан һауыуҙан һаҡлай, артериялarҙы нығыта. Бының өсөн көнөнә ике шәшке сәй йәки ҡәһүә эсеү ҙә етә. Көнөнә 10 шәшке сәй эсеү мейе инфаркты һәм йөрәк дисфункцияһынан һаҡлай.

■ Йәш кешеләр көн һайын ҡулланған электрон ҡоролмалар баш ауыртыуына килтерә алмай. Был турала Германия ғалимдары белдерә. Улар 13 йәштән 17 йәшкә тиклемге 1025 йәш кешене тикшереп, кәрәҙле телефон да, компьютер уйындары ла, телевизор ҙа баш ауыртыуына килтермәүен раҫланы. Ә бына ике сәғәт буйына музыка тыңлау зарарлы икән.

■ Әсә булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙарға тундырма ярҙамға килә ала. Принстон (АҠШ) университеты ғалимдары белдереүенсә, тиҙерәк ауырға ҡалыу өсөн тундырманы йышыраҡ ашарға кәрәк. Тикшеренеү һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, аҙнаһына ике тапҡыр эскимо йәки пломбир менән һыйланған ҡатын-ҡыҙҙың ауырға ҡалыу менән бәйле проблемалары булмай. Эксперттар шулай уҡ майһыҙландырылған һөттө нормаль һөт менән алыштырырға кәңәш итә.

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ

**"Киске Өфө" гәзитенең һәр һанын ентекләп уҡып, унда ҡуйылған һорауҙарға яуап эҙләргә, аҡыллы ағай-апайҙарҙың төрлө фекерҙәре тураһында уйланырға, ҡайһы берҙәре менән эстән генә бәхәсләшергә яратам. "Башҡорт телендә һөйләшәм" конкурсының "Булыр илдең балаһы бер-беренә "батыр" тиер, бөлөр илдең балаһы бер-беренә "бахыр" тиер" темаһы өҫтөндә лә байтаҡ баш ватып йөрөнөм. Ҡараңғы төшөп, йоҡларға ла ваҡыт етте, ә мин һаман да күңелемдә биләп алған һорауға яуап таба алмай яфаланам. Нимә һуң ул батырлыҡ? Ниндәй сифаттар кешене батыр итә? Ни өсөн балалары бер-береһенә "батыр" тип өндәшкән илдең генә киләсәге бар?**




# УЛДАРЫ БАТЫР БУЛҺА...

## илдең күге йәйғорло булыр

Ҡолағыма сихри моң ишетелә, яҡтылыҡтан күҙҙәрем сағылғандай була. Ҡайҙа килеп юлыҡтым мин? Башҡа илгә оҡшамаған батшалыҡ икән был ер. Был серле илдә ете ырыу халҡы донъя күрә икән. Был батшалыҡтың баш осондағы күк йөҙөндә һәр ваҡыт йәйғор нур сәсеп тора, урындағы халыҡтың тормош тотҡаһы тап ошо йәйғор икән. Шуға ла был мөғжизәле илде "йәйғорло ил" тип атағандар, имеш. Барлыҡ кешелекте хайран ҡалдырырлыҡ матур йәйғор ете ырыу халҡының ете төрлө күркәм сифатынан яралған. Ә йәйғорҙоң нигеҙе мөхәббәттән тора.

Был илгә баҫҡынсылар ҙа аҙ килмәй, ти, ләкин береһенең дә бындай ныҡ, берҙәм дәүләтте баҫып алырға көстәре етмәй. Сөнки йәйғорло илдең халҡы арыҫландай батыр улдар үҫтерә икән. Уландары илен, халҡын ярата һәм уның өсөн һәр саҡ көрәшкә сығырға әҙер тора. Илдең халҡы ла берәй хәл була ҡалһа, кәңәшләшеп, берҙәм эш итә, ти. Кешеләрҙең йөҙҙәрендә бәхет нурҙары сағыла, күҙҙәрендә дәртле осҡондар уйнап тора...

Әсәйемдең: "Ҡыҙҙар, торoғoҙ!" - тигән яғымлы тауышына уяныр китһәм, наҙлы ҡояш нурҙары бит остарымды йылытып уйнай. Күҙҙәремде асмай ғына күге тыныс илем, туғандарым, йылы өйөм өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтәм. Бына бит, кистән борсоған һорауҙарыма яуап итеп матур төш күрһәтте Хоҙай! Сабый бала донъяға килгәндә "батыр" йәки "бахыр" тигән мөһөр менән тыумай. Батырҙы ла, бахырҙы ла тәүҙә ғаиләлә тәрбиәләйҙәр, аҙаҡтан милләт, йәмғиәт кешенең кем булып китеренә йоғонто яһай. **Тимәк, йәйғорло илдәге кеүек, һәр ғаилә нигеҙендә мөхәббәт ятһа, унда үҫкән балалар бер нисек тә бахыр була алмай. Ҙур батырлыҡтар ҡылмаһа ла, ул яратҡан ата-әсәһен, туғандарын һәр саҡ ҡурсырға әҙер тора. Ә бындай бала, үҫкәс, илен дә, милләтен дә яҡлай аласаҡ. Бер кемде лә ярата алмаған кеше кемде яҡлай алһын? Ундай кеше үҙен яратып, үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып ҡына йәшәйәсәк. Һәр беребеҙ эргә-тирәбеҙҙәгеләргә иғтибарлы булып, һөйөүен бирел торһа, ниндәй берҙәм милләткә әйләнәсәкбеҙ!**

**Нәркәс МИҢЛЕБАЕВА.**
**Әбйәлил районы.**

# ҮҘЕБЕҘҘЕ...

## үҙебеҙ күтәрәйек башта

**Мин матур, ҡеүәтле, иҫ киткес бай тәбиғәтле Башҡортостан ерендә тыуғанмын. Республикам, халҡым, телем менән сикһеҙ ғорурланам.**

Атай-әсәйем мине башҡорт рухлы итеп тәрбиәләүгә ҙур көс һала, өйҙә тик башҡортса аралашабыҙ, башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдар алдырабыҙ, тапшырыуҙар ҡарайбыҙ. Туған телемдә матур итеп һөйләшә һәм аралаша белеүем өләсәйем йоғонтоһонан да килә.

Ҡала мәктәптәрендә башҡорт теле өйрәнелә башлаған, тиҫтерҙәремдең "Миңә башҡорт теле кәрәкмәй", тигән һүҙҙәре йөрәгемде яралай ине. Башҡорт милләтле булып та, үҙ телен белмәгән, һанға һуҡмаған ҡыҙҙар һәм малайҙар йәлләү тойғоһо уятһа, башҡа милләт балаларының дәүләт телен өйрәнергә теләмәүе аптырауға һалды. Башҡаларға башҡорт теленең күркәмлеген күрһәтер өсөн яҡшы уҡырға, башҡорт телендә тартынмай һөйләшергә, телем менән ғорурланғанымды күрһәтергә тырышам. Ҡасандыр: "Башҡорт теленән олимпиадала ҡатнашҡанымды ишетһәләр, көләрҙәр инде", - тип оялғанымды хәтерләйем. Шул саҡта өләсәйемдең кәңәштәре, "Бөлөр илдең балаһы бер-беренә "бахыр" тиер" кеүек халыҡ мәҡәлдәрен әйтеп ҡуйыуы мине алға әйҙәй, туған телемдә һәр ҡайҙа байраҡтай күтәрергә көс бирә торғайны. Бөгөн башҡорт теленә ҡараштың үҙгәреүен күреп, ҡыуаныс кисерәм. Мауыҡтырғыс итеп ойошторолған дәрестәр дуҫтарыма ла телдә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнә башларға этәргес бирҙе. Телебеҙҙең нәфислеге, матурлығы, бай тарихы ла быға йоғонто яһамай ҡалмағандыр.

Хәҙер мин оялып түгел, ғорурланып йәшәйем, дуҫтарым менән бергә фән тауҙарына үрләйем, тарих өйрәнәм, шәжәрәмде төҙөйөм. Телебеҙҙең бәҫен күтәргән өсөн ил ағаларына, халҡым өсөн янып йәшәгән милләттәштәремә рәхмәтлемен, улар башҡа милләттәр менән дуҫлыҡ ептәрен нығытты, ихтирам тойғоларын уятты. "Булыр илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тиер", - ти өләсәйем". Бына ошо аҡылда ла инде беҙҙең йәшәйешебеҙ нигеҙе: башта үҙ телебеҙҙе үҙебеҙ ҡәҙерләргә, үҙ милләтебеҙҙе үҙебеҙ күтәрергә, берберебеҙҙе: "Һин шәп, һин батыр!" - тип күтәрергә өйрәнһәк, башҡалар ҙа беҙҙе хөрмәт итәсәк.

**Зөлфиә МӘРҘӘНОВА.**
**Өфөнөң 141-се мәктәп уҡыусыһы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле уҡыусылар һәм студенттар! Республика йылына арнап иғлан ителгән "Башҡорт телендә һөйләшәм" конкурсының икенсе темаһына күсәйек: "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул". Ошо башҡорт халыҡ мәҡәлендәге аҡылдан сығып, үҙ ереңдең патриоты булыу, үҙ халҡыңа балалар үҫтереү, үҙ ереңде сәскә аттырыу өсөн хеҙмәт итеү тураһында уйланыуҙар, һығымталар, фекерҙәр сағылырға тейеш ҡатнашыусылар эштәрендә. Конкурстың шартын белһәгеҙ: ҡатнашыусы яҙмаһын үҙ аллы, ата-әсә йәки уҡытыусы ярҙамынан тыш башҡара - был конкурстың төп талабы. Сөнки быны тикшереү мөмкинлеге буласаҡ: иң яҡшы тип табылған эштәрҙең авторҙарын Өфөгә - "Киске Өфө" гәзите редакцияһына саҡырып, үҙ аллы яҙма эш буйынса йомғаҡлау ярышы үткәреп, еңеүсе билдәләнәсәк. Яҙмалар махсус төҙөлгән баһалама комиссияһы тарафынан тикшереләсәк. Ә конкурс һөҙөмтәләре буйынса йыл аҙағында редакция еңеүселәргә махсус бүләктәр - кеҫә телефондары тапшырасаҡ. Көс етмәслек түгел шарттар, уны үтәү өсөн туған телеңдә матур һөйләшеүгә һәм яҙыуға ярҙам иткән иң ябай ҡағиҙәләр ҡаныңа һеңешкән булырға тейеш: ғаиләлә туған телдә аралашыу, әҙәби китаптар уҡыу, өлкән быуын һөйләшенә ҡолаҡ һалып, үҙеңдең телмәреңдә булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштереү, ғөмүмән, туған тел моңон һәм көсөн күңелеңә һеңдергән булыу. Бындай баланың һәм йәш кешенең туған телдәге һөйләше һәм яҙмаһы камил булыуына шик юҡ.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

### Шайтандың асыҡтан-асыҡ һөйләүе...

* * *

Ул һөйләп бөткәс, Аллаһ илсеһе:

- Әгәр һин ысынында дөрөҫөн һөйләһәң, кешеләр араһынан нығыраҡ кемде күрәлмайһың, миңә аңлатып үт? - тип һораны.

Шайтан:

- Һине, о Мөхәммәт! Аллаһы Тәғәләнең яралтҡандары араһынан һинән дә нығыраҡ күрәлмаған бер кемем юҡ... Хәйер, кем һинең менән ярыша ала һуң? -тине.

Аллаһ илсеһе:

- Минән һуң кемде күрәлмайһың? - тип һораны.

Шайтан:

- Үҙен Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә бағышлаған тәҡүәле үҫмерҙе,- тине.

Артабан бер-бер артлы һорауҙар һәм яуаптар дауам итте. Аллаһ илсеһе һораны, шайтан яуап бирҙе:

- Һин тағы ла кемде яратмайһың?

- Сабырлыҡ күрһәткән һәм шикле нәмәләрҙән ҡасҡан ғалимды.

- Тағы ла?

- Нимәнелер булһа таҙартырға теләп, уны өс тапҡыр йыуған кешене.

- Ә тағы ла?

- Үҙенең фәҡирлегенә түҙгән һәм быны бер кемгә лә һөйләмәгән һәм үҙ хәленә зарланмаған ярлыны...

- Ә был ярлы түҙемле икәнен ҡайҙан беләһең?

- О Мөхәммәт, ул үҙе кеүектәргә үҙенең фәҡирлеге тураһында зарланмай. Әгәр кем дә булһа өс көн буйына үҙенең фәҡирлеге тураһында үҙе кеүек ярлыға һөйләй икән, Аллаһы Тәғәлә уны сабырлыҡ күрһәткәндәр рәтенә индермәйәсәк. Сабыр итеүселәр улай итмәй. Асылда, кешенең үҙен тотошонан, ғәмәлдәренән һәм зарынан мин уның сабырмы, юҡмы икәнлеген беләм.

- Ә тағы ла кемде күрәлмайһың?

- Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән байҙы.

- Ә һин уның яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгәнен ҡайҙан беләһең?

- Әгәр ҙә мин уның табышты хәләл юл менән тапҡанын һәм уны рөхсәт ителгәнгә тотонғанын күрһәм, уның яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгәнлеген беләм.

* * *

Аллаһ илсеһе һөйләшеүҙе икенсе йүнәлешкә бороп, былай тип һораны:

- Минең өммәтем намаҙға торғанда һинең менән нимә була?

- О, Мөхәммәт, минең бөтә тәнем ҡалтырана.

- Ниңә улай һуң, ҡәһәрләнгән?

- Ҡол баш эйеп, сәждә ҡылыуҙан Аллаһ ҡаршыһында бер кимәлгә юғары күтәрелә.

- Ә улар ураҙа тотҡанда һин үҙеңде нисек тояһың?

- Бығауланған килеш улар ауыҙ асҡанға тиклем хәрәкәтһеҙ ҡалам.

- Ә улар хажға барғанда һин үҙеңде нисек тояһың?

- Был ваҡытта мин аҡылымдан яҙам.

- Ә улар Ҡөрьән уҡыған ваҡытта һиңә нисек?

- Ул ваҡытта мин, ҡурғаш ут ялҡынында ирегән кеүек, ирейем.

- Ә улар саҙаҡа биргән ваҡытта һин үҙеңде нисек тояһың?

- Эйе, ул ваҡытта минең хәлем нык ауыр була. Гүйә, саҙаҡа биргән кеше ҡулына бысҡы тотоп, мине икегә быса.

Мөхәммәт бәйғәмбәр быының сәбәбе тураһында һорашты:

- Ә ниңә һин икегә бүленәһең?

Иблис:

- Быныһын да аңлатам. Саҙаҡаның дүрт өҫтөн сифаты бар:

1. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биргән кешене таҙарта һәм фатихаһын бирә.

2. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биреүсегә ҡарата кешеләрҙә һөйөү уята.

3. Аллаһы Тәғәлә тамуҡ менән саҙаҡа биреүсе кеше араһына саҙаҡанан ҡәртә ҡуя.

4. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биреүсе кешегә бәлә, бәхетһеҙлек һәм ауырыуҙар ебәрмәй.

БЫЛ - ГОНАҺ!



### РИБА АЛЫУ

Ҡөрьән-Кәримдең "Баҡара" сүрәһенең 278 -279-сы айәттарында былай тип әйтелә: "Иман килтергән кешеләр! Мосолман икәнһегеҙ, Аллаһтың нәфрәтенән ҡурҡығыҙ, риба алмағыҙ. Риба алһағыҙ, Аллаһҡа һәм Бәйғәмбәргә һуғыш асҡан кафырҙар кеүек булырһығыҙ. Был эштәрҙән тәүбә итһәгеҙ, малығыҙ-байлығығыҙ үҙегеҙгә ҡалыр".

"Риба (әжәткә биреп торған аҡсанан-малдан арттырып алынған харам керем) ашағандар иһә шайтан зәхмәте һуҡҡан тиләләр кеүек, ҡеберҙәренән торасаҡ. Улар: "Сауҙа итеү ҙә риба кеүек бит" тигән өсөн шундай хәлгә ҡалырҙар. Аллаһ алыш-биреште хәләл итте, рибаны харам ҡылды. Әгәр ҙә кемдер Аллаһтан (риба алмаҫҡа) әмер килгәс, рибанан баш тартһа, әмер килгәнгә ҡәҙәр алған рибаһы ғәфү ителер. Уның эше Аллаһ хөкөмөндә булыр һәм улар шунда мәңгегә ҡалыр".

Күренеүенсә, килтерелгән айәттар Ҡөрьәндәге иҫкәртеүҙәргә ҡарамай, процент буйынса йәшәй башлаған һәм шул арҡала оҙаҡ ваҡытҡа тамуҡҡа эләгеүселәргә алдан киҫәтеү булып яңғырай. Аллаһ илсеһе: "Ете һәләкәтле гонаһты эшләүҙән ҡурҡығыҙ", - тигән. Сәхәбәләр: "Эй, Аллаһ илсеһе! Былар ниндәй гонаһтар?" - тип һораған. Аллаһ илсеһе шулай тигән: "Аллаһҡа тиңдәшлек килтереү; сихыр; кеше үлтереү; процентҡа йәшәү; етемдәрҙең мөлкәтенә ҡул һуҙыу; яу яланынан ҡасыу; ғәйепһеҙ мосолманға яла ағыу".

Аллаһ илсеһе: "Аллаһ риба менән шөғөлләнеүселәрҙе лә, риба алыусыларҙан аҡса алыусыларҙы ла ҡарғай". Ан-Насаи Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең шундай хәҙисен еткерә: "Кем риба алыусыларҙан аҡса ала, кем риба алыу менән шөғөлләнә, шулай уҡ кем быларҙың барыһын да яҙып алып бара - Аллаһтың ҡарғышы булыр".

### ЕТЕМ МӨЛКӘТЕНӘ ҠУЛ ҺУҘЫУ

Бәйғәмбәребеҙ әйткән ете һәләкәтле гонаһтар араһында етем балаларҙың мөлкәтенә ҡул һуҙыу ҙа бар.

"Хәйлә һәм һылтау менән етем хаҡын ашаған кешеләр ҡарындарына утлы киҫәү тыҡҡан кеүек буласаҡтар, быныһы хаҡ, һуңынан улар ялҡынлы утҡа барып инәсәк" (ән-Ниса,10).

"Балиғлыҡҡа ирешкәнгә саҡлы етемдең малына ҡағылма, яҡшы ниәт менән генә ҡағыл (ул малды етем кәрәгенә тотҡанда ғына, үҙенә алһаң, ҡайтарып биреү шарты менән йәки ул малды арттырып булһаң ғына). Ғәҙел итеп үлсәгеҙ, ғәҙел бүлегеҙ. Беҙ һәр кемгә йөктө үҙе күтәрә алған ҡәҙәре генә тейәйбеҙ. Яҡындарығыҙ тураһында ла ғәҙеллек менән шаһитлыҡ итегеҙ. Аллаһҡа биргән һүҙегеҙҙә торогоҙ" ("Әнғәм", 152).

Опекундарға етемдәрҙең мөлкәтен үҙҙәренә рөхсәт ителгән тиклем ҡулланырға рөхсәт ителә, бынан артып киткәне - харам һәм ул мәнфәғәтҡә килтермәйәсәк. Был рөхсәт ителгән өлөш насар уйҙарҙан азат, ислам ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм үлсәмдәренә тап килгән булырға тейеш.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Белем бер ваҡытта ла тулы булмай

Донъяла иң аңра кешене эҙләп сығып киткән үҫмер хаҡында ҡыҙыҡлы риүәйәт йәшәй. Бер иртәлә ауыл урамы буйлап китеп барғанда ул юл ситендә ултырған бөләкәй генә өйҙән иңрашҡан сәйер тауыш ишетә. Туҡтап, бер ни тиклем ҡолаҡ һала: теге тауыш әленән-әле ҡабатлана. Ниһайәт, үҫмер үҙенең ҡыҙыҡһыныуын тыя алмай, күтәрмәгә менеп, шаршау аша өй эсенә күҙ һала. Ул урта йәштәге кешенең эске кейемдә бүлмә буйлап йүгереп, ултырғыс арҡаһына эленгән салбарына ҡарай һикереп йөрөгәнен күреп, аптырап ҡала. Ҡарт иҫәр һикерәнләп йөрөй торғас, иҙәнгә тәгәрәй һәм бер ни тиклем ауыртыуҙан иңрашып ята. Яңынан килеп тора ла, ултырғысты торғоҙоп, уға тағы ла салбарҙарын элеп ҡуя һәм тиҙлек алыр өсөн бүлмәнең икенсе осона барып баҫа. Бер, ике, өс. Һикерә. Ҡырағай тауыш яңғырай.

Үҫмер ишекҡә туҡылдатып, өйгә ингәс, былай тип һорай:

- Әйтегеҙ әле, ни өсөн һеҙ былай ҡыланаһығыҙ?

- Мин ошо рәүешле салбарымды кейәм. Мин уны ултырғысҡа эләм дә, йүгереп килеп, уны кейеп алам, - тип яуап бирә ҡарт. - Минең атайым да, уның атаһы ла шулай иткән, ә улар өсөн яҡшы булған әйбер миңә лә ҡулай.

- Әммә был бит әкрен һәм ауыр ысул. Күпселек кешеләр салбарҙың тәүҙә бер балағын, шунан икенсеһен кейә. Шулай иткәндә, күпкә еңелерәк һәм тиҙерәк була, - тип әйтә йәш кеше. - Ултырғысҡа ултырығыҙ, мин һеҙгә уның нисек эшләнгәнен күрһәтәм.

Хәҙер инде теге ҡарт аптырауға ҡала.

- Килеп, ҡайһылай шәп иттегеҙ әле! - тип ҡыуаныс белдерә ул. - Һеҙгә лә минән өйрәнергә һуң түгелдер, тип уйлайым.

Белергә кәрәкле бөтә нәмәне лә белеп бөттөм, йәки нимәгә өйрәнеп була, барыһына ла өйрәндем, тип иҫәпләгән кеше хаталана. Бөйөк даһиҙарҙың береһе Альберт Эйнштейн бер саҡ былай тип әйткән: "Ғилем алмаған көн - бушҡа үткән көн. Өйрәнә торған әйберҙәр шул тиклем күп, ә бының өсөн ваҡыт шул тиклем аҙ". Үҙенең әйткәндәренә эйәреп, Эйнштейн ғүмеренең ахырынаса эшләүен һәм тырышып уҡыуын дауам иткән. Беҙҙе донъяны танып белеүҙе бер ваҡытта ла туҡтатмаған бөйөк кешеләрҙең бик күп өлгөләре илһамландыра.

Белем алыуҙың сиге юҡлығы менән килешәһең икән, "Бишектән алып ҡәбергә тиклем белем алыу" тигән әйтем аҡыллы тормош девизы булып тора ала. Беҙ үҙебеҙҙең һәм бүтәндәрҙең тормошон байыта алырҙай әйберҙәргә һәр ваҡыт өйрәнә алабыҙ. Бының өсөн ҡайһы саҡта иҫкесә фекерләү рәүешенән һәм ҡайһы бер ғәҙәти ғәмәлдәрҙән баш тартып, яңыса эшләп ҡарау ҙа етә. Шулай иткәндә, тормошобоҙ тағы ла мауыҡтырғысыраҡ һәм ҡәнәғәт тойғоһо уятырҙай ҡыуанысլыраҡ була бара.

Эдисон: "Әгәр ҙә нимәнелер егерме йыл элек эшләгән кеүек теп-теүәл башҡараһың икән, уны тағы ла яҡшыраҡ башҡарыу ысулы барлығын да бел", - тип әйткән. Әгәр ҙә ниндәйҙер билдәле бер өлкәлә тағы ла күберәк ғилем туплайһың икән, һин тағы ла ҙурыраҡ уңыш ҡаҙана һәм бүтәндәргә өлгө булып тора алаһың.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*✓ Ата-әсәләрҙе 11-се класта БДИ тапшырыу мәсьәләһе борсой, шуға ла уларҙың күбеһе баланы 9-сы кластан һуң уҡыу йортона урынлаштырырға тырыша. Ошо йәһәттән БДУ колледжы тап шундай уҡыу йорто булып тора.*

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Һуңғы йылдарҙа илебеҙ мәғариф системаһының бик күп үҙгәрештәргә дусар ителеп, һәр төрлө тәжрибәләр майҙанына әүерелеүе бер кемгә лә сер түгел. Белем биреү өлкәһендә тотороҡлолоҡ булмауы яңынан-яңы проблемалар килтереп тыуҙыра. Уҡыусылар ғына түгел, хатта ата-әсәләр хәҙер "БДИ" тигән һүҙҙән ҡалтырап төшә. Ошондай шарттарҙа уҡыусылар үҙҙәренә ҡарата йылылыҡ, хәстәрлек һәм яҡлауға айырыуса мохтаж. Тап ошо йәһәттән - балалар мәнфәғәтен ҡайғыртыу ниәтенән сығып эш итеүсе уҡыу йорттары, бәхеткә күрә, бар әле баш ҡалабыҙ Өфөлә. Башҡорт дәүләт университетының хоҡуҡ һәм иҡтисад белгестәре әҙерләүсе колледжы ана шундайҙарҙан, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Ошо уҡыу йорто хаҡында ентекләберәк һөйләүен һорап, беҙ уның директоры Әхтәр Мөхәмәт улы БОСҠОНОВҡа мөрәжәғәт иттек.**



# ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТОНА...

## беҙҙең әҙерлек аша барһаң, уңырһың

- Юғары уҡыу йорттарына мәктәп эскәмйәһенән түгел, ә әҙерлекле студент рәүешендә килеү икеләтә отошло. Башланғыс һөнәри белем алып килгән студенттар артабан да үҙе һайлаған йүнәлештә уҡырға ынтыла, үҙаллылыҡҡа ла, тәртипкә лә күнеп өлгөргән була. Ә йәш кешенең үҙ бурысына яуаплы ҡарарға өйрәнеүе бик мөһим, сөнки бөгөн йәштәребеҙ нисек кенә талантлы һәм белемле булмаһын, уларға яуаплылыҡ тигән сифат етешмәй. Ғөмүмән, шәхес тәрбиәләү мәсьәләһе бөгөн бик актуаль. Бигерәк тә Өфө кеүек ҙур мегаполистарҙағы шарттар баланың шәхес сифаттарын, үҙенсәлеген юҡҡа сығарыуы мөмкин. Шуға ла беҙ тәрбиә мәсьәләһенә төп иғтибар бирәбеҙ. Беҙҙә төркөмдәргә кураторҙар беркетелгән, балаларҙың һәр аҙымы уларҙың күҙ алдында. Тәртип булған ерҙә, әлбиттә, белем дә була. Тәртипле, яуаплы һәм белемле йәш кешенән бынамын тигән белгес килеп сыға.

БДУ-ның Хоҡуҡ һәм иҡтисад колледжы 1999 йылда тап ошо маҡсатты - өмөтлө йәш белгестәр әҙерләүҙе күҙҙә тотоп асылды ла инде. Йәштәр бында IX һәм XI кластарҙан һуң, "Хоҡуҡ нигеҙҙәре", "Хоҡуҡ һәм социаль тәьминәтте ойоштороу", "Финанс", "Иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе" бүлектәренә инеп, 2 йыл да 10 ай уҡығандан һуң база кимәлендәге диплом алып сыға, ә инде "4" һәм "5" билдәләренә генә өлгәшеүселәр уҡыуҙарын артабан да беҙҙә тағы бер йыл дауам итеп, юғары кимәл дипломы ала һәм үҙҙәре һайлаған специальность буйынса БДУ-ның III курсына ҡабул ителә. Ә инде колледждың башҡа сығарылыш уҡыусылары һайлаған һөнәрҙәре буйынса (иҡтисад һәм хоҡуҡ) юғары белем алырға теләһә, диплом проектын яҡлағандан һуң, университетҡа ҡабул итеү имтихандарһыҙ, әңгәмәләшеү һөҙөмтәләре нигеҙендә ҡабул ителә. Тиҙерәк эшкә урынлашып, практик тәжрибә тупларға теләүселәр уҡыуҙарын ситтән тороп йәиһә киске бүлектәрҙә дауам итә ала.

Эшкә урынлашыу йәһәтенән дә сығарылыш студенттарыбыҙ өсөн беҙҙең күңел тыныс: урта профессиональ белем тураһындағы БДУ дипломына эйә булған юристар суд секретарҙары, ҡала-район эске эштәр бүлектәре инспекторҙары, ә финансистар банк хеҙмәткәрҙәре һәм менеджерҙар булып эшкә урынлаша ала.

Беҙҙең колледжда белем алыуҙың бер өҫтөнлөгө - уҡыу йортобоҙ предприятиелар һәм ойошмалар менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Сөнки беҙҙең уҡытыусыларыбыҙҙың күбеһе ошо предприятиелар белгестәре. Улар үҙ эшмәкәрлеге миҫалында беҙҙә йәнле итеп дәрестәр алып бара, студенттарыбыҙ уларҙың коллективында практика үтә. Мәҫәлән, финанс-иҡтисад фәндәренән уҡытыусы Неля Фәнил ҡыҙы Ғизәтуллина баш ҡалабыҙҙың бер предприятиеһында бухгалтер булып эшләй, шуға күрә лә был фәндең бөтә нескәлектәрен яҡшы белә. Студенттар уның лекцияларын ҡалдырмай йөрөй, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға һәр ваҡыт төплө яуап ала.

Әлбиттә, уҡытыусыларыбыҙҙың һәр береһе һоҡланырлыҡ һөнәр ҡаҙанышына эйә, уларҙы бер мәҡәлә сигендә һанап бөтөрлөк түгел. Төрлө мәктәптәрҙән йыйылған балаларҙың белем кимәле лә төрлөсә. Шуға күрә лә уларҙың база кимәлен берҙәм системаға һалыуы уҡытыусыларыбыҙ өсөн еңел эш түгел. Иң мөһиме - студенттарыбыҙға ҡарата туғандарса йылы мөнәсәбәт булдырылған беҙҙә. Әле яңы ғына мәктәп партаһынан айырылған уҡыусы балаларға әүҙемлек, йылғырлыҡ һәм үҙаллылыҡ талап иткән тынғыһыҙ студент тормошона өйрәнеп китеүе бик ауыр. БДУ колледжы ошо балаларға үҙаллы тормош юлына баҫырға ярҙам итеп кенә ҡалмай, төплө һөнәри белем дә биреп сығыра. Балаларға үҙен ошо һөнәрҙә һынап ҡарау мөмкинлеге бирелә. Колледжда уҡыу ваҡыты өс йылға тиклем дауам итә. Ошо осорҙа студент һайлаған өлкәһенең бөтә үҙенсәлектәрен төшөнә ала, уны теоретик яҡтан да, практик йүнәлештә лә өйрәнә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә сифатлы белем алыу, дәүләт дипломына эйә булыу - ҙур ҡаҙаныш ул. Икенсенән, уҡыуын артабан дауам иткән хәлдә киләсәккә студент тормошона ныҡлы нигеҙ һалына.

Колледж БДУ менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Беҙҙең уҡыусылар юғары уҡыу йорто студенттары өсөн ҡаралған шарттарҙан берҙәй үк файҙаланыу мөмкинлегенә эйә. Улар юл йөрөү билетынан, университет китапханаһынан файҙалана, спорт залдарына йөрөп, күнекмәләр ала, башҡа төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә.

Колледж асылғандан алып ун йыл эсендә ул йәмғәтселектә киң танылыу яуланы һәм лайыҡлы абруй менән файҙалана. Был уҡыу йортона инергә теләүселәрҙең йылдан-йыл арта барыуы тап ошо турала һөйләй ҙә инде. Беҙҙә, ғәҙәттә, 50 урынға йыл да 150-200-ләп кеше дәғүә итә.

Әйткәндәй, күп ата-әсәләрҙе 11-се класта БДИ тапшырыу мәсьәләһе борсой һәм тулҡынландыра, шуға ла уларҙың күбеһе 9-сы кластан һуң баланы урта һөнәри белем биреүсе уҡыу йорттарына урынлаштырырға тырыша. Ошо йәһәттән БДУ колледжы тап балалар һәм ата-әсәләр хыял иткән уҡыу йорто булып тора ла инде.

Уҡыуҙар беҙҙә фәҡәт көндөҙгө бүлектә алып барыла. Июнь ахырында документтар ҡабул ителә, ә июль урталарында ҡабул итеү имтихандары башлана. Юрист һөнәрен һайларға теләүселәр тарихтан (йәмғиәтте өйрәнеү) һәм рус теленән, ә иҡтисад бүлегенә математика һәм рус теленән имтихандар бирә. Башҡорт мәктәптәрен тамамлап килеүселәр өсөн башҡорт төркөмө асыу ҙа күҙаллана. Әйткәндәй, уҡыу түләүле, йылына 17 мең һум. Әлегә ятағыбыҙ юҡ.

Ата-әсәләр һәм уҡыусылар иғтибарына тағы ла шуны хәбәр итәбеҙ: **27 март (шәмбе) 14 сәғәттә БДУ колледжында (Өфө ҡалаһы, Зәки Вәлиди урамы, 33-сө йорт) Асыҡ ишектәр көнө үткәрелә, рәхим итегеҙ!** Бында уҡыу йорто эшмәкәрлеге менән яҡынданыраҡ танышыу, уҡытыусылар һәм колледж етәкселеге менән осрашып, үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алырға мөмкин буласаҡ.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы



**Ҙур зал**

**24 мартта** Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин етәкселегендәге **Башҡортостан Республикаһының Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры** сығыш яһай. **"Йырлы-моңло республикам!"** тип аталған концертта Флүрә Килдейәрова, Иҙрис Ғәзиев, Йәмил Әбделмәнов, Руслан Хәбибуллин, Фәнәүи Сәлихов, Вәхит Хызыров, Фәдис Ғәниев, Вәкил Йәләлетдинов, Азамат Тимеров, Хәмит Ишбулдин, Альберт Шаһиев, Миңзифа Исҡужина, Римма Амангилдина, Лилиә Ишемйәрова, Радик Вәлмөхәмәтов, Сәйҙә Ильясова, Филүс Ҡалмурзин, Вәсилә Фәттәхова, Әлим Ҡәйүмов ҡатнаша.

**27 мартта** йәш, һәләтле бейеүсе **Әлиә Нурғәлиева "Бейеүсе ҡыҙға"** тип исемләнгән концерт программаһы тәҡдим итә. Программала башҡорт, мари, рус, үзбәк, татар, һинд, ҡытай, сиған, тарантелла бейеүҙәре.

**Орган залы**

**27 мартта** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Рәсәй конкурсы лауреаты **Нурия Басирова "Донъя матур, донъя киң..."** тип аталған юбилей тамашаһына саҡыра. Кисәлә Азат Айытҡолов, Фәнәүи Сәлихов, Индира Әсәҙуллина, Эльвира Хәйретдинова, Илшат Мөслимов, Нәзифә Ҡадирова, Ғәли Алтынбаев, Әлим Ҡәйүмов, Вадим Зәкиев һәм башҡалар ҡатнаша.

### Ғафуриҙар йәнә осраша

Баш ҡалабыҙҙың юғары уҡыу йорттарында белем алыусы **Ғафури районы студенттарының** матур йолаға әүерелгән осрашыуы быйыл **22 мартта** "Конгресс-холл" бинаһында уҙасаҡ. Байрам Республика йылына һәм районды

ң төҙөлөүенә 80 йыл тулыуға арналыуы менән дә иҫтәлекле буласаҡ.

"Табын" яҡташтар клубы үҙ ҡанаты аҫтында эшләп килеүсе студенттар ойошмаһы менән берлектә быйылғы сараны үҙенсәлеклерәк тә, ҡыҙыҡлыраҡ та итеп үткәреүгә күп көс һалды. Ғафури районы хакимиәте делегацияһы ла бай программа менән килмәксе. Барлыҡ студенттарға ла йылдағыса матди ярҙам күрһәтеләсәк, ә инде яҡташтар ойошмаһы идараһы ағзалары - күренекле шәхестәр - иң яҡшы студенттарға үҙ премияларын тапшырасаҡ.

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24, 25 мартта** 19.00 сәғәттә У. Шекспир пьесаһы буйынса ҡуйылған **"Ромео һәм Джульетта"** спектакленең премьераһы була.

*ХОККЕЙ*

# СИРАТТА - "НЕФТЕХИМИК"

**Ҡайһы бер хоккей белгестәре хәҙер "Салауат Юлаев" командаһын яҡшы көйләнгән йәшел машинаға тиңләй. Бындай тиңләү һис тә юҡҡа түгел. Юлаевсылар КХЛ чемпионатының даими уйындарында һуңғы 12 матчты бары тик еңеү менән тамамланы һәм башҡа лидерҙарҙы ныҡ ҡына артта ҡалдырып, 129 мәрәй менән иң алға сыҡты һәм континент кубогы менән бүләкләнде.**

Континент хоккей лигаһы чемпионатының икенсе, хәл иткес өлөшө плей-офф уйындарын шулай уҡ бик уңышлы башланы: Екатеринбург ҡалаһының "Автомобилист" командаһын "Салауат Юлаев" үҙ майҙанында ҡабул итте. Ул сирек финалда "Автомобилист" командаһын 3 тапҡыр оторға тейеш ине. Юлаевсылар үҙ майҙанында тәүге уйынды 5:1, ә икенсе матчты 4:1 иҫәбе менән тамамланы. Еңеү иҫәбе 2:0 булды. Һуңғы хәл иткес өсөнсө еңеү Екатеринбург ҡалаһында яуланды. Был матчта юлаевсыларҙы тотоп тыйырлыҡ түгел ине. "Салауат Юлаев" хоккейсылары уйындың тәүге минутынан уҡ көслө һөжүм башланы. Көсөргәнешле алыштар күбеһенсә "Автомобилист" командаһы яғында барҙы. Майҙан хужаларының ҡапҡасыһы Иван Лисутин юлаевсы Владимир Антипов сойорғотҡан шайбаны тота алмай ҡалды. Артабан Александр Радулов үҙенең мәргәнлеген күрһәтте. Беренсе осор бөтөп барғанда Александр Пережогин иҫәпте өскә еткерҙе. Икенсе осорҙа Патрик Торесен 4-се, ә Мирослав Блатяк 5-се шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына сәпәне. "Тишек иләккә" әйләнгән ҡапҡаға Константин Кольцов 6-сы, ә Виктор Козлов 7-се голды индерҙе.

"Автомобилист" командаһының һөжүм итеүсеһе Артур Сарваров беренсе шайбаны индерҙе. Майҙан хужалары ҡунаҡтар ҡапҡаһын икенсе тапҡыр аса алманы. Иң һуңғы 8-се шайбаны Мирослав Блатяк индерҙе. Ул был осрашыуҙа иң яҡшы уйынсы тип табылды.

"Салауат Юлаев" командаһы көс һынашыуҙы плей-офф серияһында бик һирәк була торған 8:1 иҫәбе менән тамамланы һәм ярым финалға сыҡты. Ярым финалда Өфөгә Түбәнге Каманың "Нефтехимик" командаһы килде. Уның менән көс һынашыу шулай уҡ 3 еңеүгә хәтлем дауам итәсәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

АФАРИН!

# ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШЛӘГӘНДӘР,

## билдән түбән юморҙар юҡҡа сыҡҡан



"ХХ Централ" командаһы.



"Башҡорттар.RU" командаһы.



"Ығы-зығы" командаһы.



"VIP-йәштәр" командаһы.

**Вилнур ХӘСӘНОВ, жюри рәйесе:** Быға тиклем өс йыл тирәһе урындар номинациялар буйынса ғына билдәләнеп килгәйне. Шуға күрә лә финалға ҡайһылыр команда бөтә номинацияла ла әҙерләнеп сыға, ә ҡайһылыр бөтә номерҙарҙы ла ҡушып, бер номинацияла ғына көслө сығыш яһап, енә лә ҡуя ине. Ошо арҡала жюриға ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп, ғәйепләүҙәр ҙә яуғыланы. Шуға ла быйыл Өфө ҡала округы хакимиәте тәрлә аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыҡмаһын өсөн конкурсты дөрөҫ итеп ойоштороу мәсьәләһе буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Быйыл финалға өс номинация буйынса ла иң көслө командаларҙы һайлап алырға, тигән ҡарарға килдек. Жюри составының үҙгәрмәүе лә ыңғай күренештәрҙең береһе булып торҙо. Сөнки йыл һайын ҡатнашҡан кеше был конкурстың принциптарын аңлап эш итә, командаларҙың үҫешен баһалай, сара кимәлен сағыштыра ала.

Ойоштороу яғы ла йылдан-йыл үҫешә. Беҙ һәр йыл конкурс аҙағынан йыйылып, сараға дөйөм баһа бирәбеҙ, мәктәп командаларына үҙебеҙҙең кәңәштәрҙе, иҫкәрмәләр еткерәбеҙ. Был үҙ файҙаһын бирмәй ҡалманы. Тәүге йылдарҙа сығыштарҙа билдән түбән шаяртыуҙар, малайҙарҙың ҡатын-ҡыҙ булып кейенеп сығыуҙары күҙәтелһә, һуңғы ике йылда беҙ быларҙан ҡотолдоҡ. Уҡыусылар хәҙер үҙ-ара дуҫлашып, татыу, берҙәм булырға өйрәнде. Конкурс аҙағынан бер-береһен ҡотлап, ҡосаҡлашып, ҡыуанышыуҙарын ҡарап тороу ҙа "Шаяниум"дың ни тиклем ыңғай һөҙөмтәләр биреүе хаҡында һөйләй.

Командалар ҙа йыл һайын арта, үҫешә. Быйыл "ХХ Централ", "Башҡорттар.RU" кеүек көслө командалар менән бер рәттән, 140-сы һанлы башҡорт гимназияһының "Ығы-зығы", 148-се һанлы башҡорт гимназияһының "Сәтәкәй" командалары сағыу сығыштары менән ҡыуандырҙы. Шулай уҡ бер уҡ алымға мөрәжәғәт итеп, шуның менән йыл һайын алдырырға тырышҡан командалар ҙа юҡ түгел. Әммә "Шаяниум" ҡалыплашыуҙы үҙ итмәй, ул үҙенсәлек һәм үҫеш талап итә.

**Венера БАЙМӨХӘМӘТОВА, Республика башҡорт лицей-интернаты тәрбиәсеһе:** Беҙ "Шаяниум"ды балалар менән бергә йыл һайын түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ һәм уны тормошҡа бер йәм, төҫ биргән тамаша итеп ҡабул итәбеҙ. Үҫеп килеүсе быуынға үҙен тормошҡа ашырыр, үҙ урынын табыр, донъяға ҡарашын еткерер өсөн ниндәйҙер сара, майҙан кәрәк. Ошо йәһәттән был конкурс уларға ҙур мөмкинлектәр бирә. Бөгөн ҡайһы бер ҡытыршылыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, матур сығыштарға тамаша ҡылынды, тип әйтергә була. "Башҡорттар.RU", "ХХ Централ" командаларының сығышын электән яратып ҡарайым. Составтары үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт көслө команда булып ҡала килә улар, был балалар артабан юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндә лә юғалып ҡалмай, һәр сарала әүҙемлек күрһәткән алдынғы студенттар булып китә. Шуға ла "Шаяниум" уҡыусылар өсөн ниндәйҙер кимәлдә оло тормошҡа алып сығыусы мәктәп тә булып торалыр. Әле шундай үҙ фекерен ҡыйыу еткерә белгән аҡыллы, һәләтле балалар үҫеп килеүенә ҡыуанып ҡарап ултырҙым. Ни тиһәң дә, киләсәк улар ҡулында бит. Йәштәрҙең башланғысын иҫәпкә алып, хуплап торғандары өсөн сараны ойоштороусыларға, балаларҙы әҙерләүселәргә рәхмәт һүҙҙәре еткерге килә.

**Айгөл ИГЛИКОВА, 148-се башҡорт гимназияһының тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:** Мин 2003 йылдан ошо мәктәптә эшләйем һәм йыл һайын балаларҙы "Шаяниум"ға әҙерләйем. Быйыл команда тулыһынса яңырҙы. Беҙ исемебеҙҙе лә "Сәтәкәй"ҙәр тип үҙгәрттек. Беҙҙең балалар араһында ауылға олатай-өләсәйҙәре янына ҡайтып йөрөүселәр байтаҡ, шуға ла беҙ күберәк ауыл темаһына мөрәжәғәт иттек. Беҙҙең балалар йырҙарҙың һүҙҙәрен дә, көйҙәрен дә үҙҙәре яҙҙы. "Шаяниум" көтөп алынған ҙур байрам, шуға ла балаларыбыҙ был сараға бөтә күңелен һалып әҙерләнә. Милли мәктәптәр балаларына бергә-бергә йыйылып, аралашыу, дуҫлыҡ ебен нығытыу өсөн күркәм сара булып тора инде ул "Шаяниум".

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАЛАНТ СӘХНӘЛӘ ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## йәшәү өсөн дә кәрәк

Янында насар иптәш тотҡансы, яңғыҙлыҡ менән ҡалыу яҡшыраҡ.

**(Кабус).**

Йөрәгемде ике нәмә тулҡынландыра: баш осомдағы мәңгелек йыһан һәм үҙемдәге әхлаҡ ҡануны.

**(Иммануил Кант).**

Өмөт - кеше күңелендә оялаған ҡурҡаҡ ҡына ҡошсоҡ ул.

**(Эмили Дикинсон).**

Талант сәхнәлә уйнау өсөн генә түгел, ә йәшәү өсөн дә кәрәк.

**(Федор Шаляпин).**

Изгеләр Гималай тауҙары һымаҡ алыҫтан яҡтыртып тора, ә яуыҙҙарҙы ҡараңғыла атылған уҡ һымаҡ, яҡындан да күреүе ауыр.

**(Будда).**

Һигеҙ тапҡыр йығылдым, туғыҙ тапҡыр аяҡҡа баҫтым...

**(Япон мәҡәле).**

Тыуыу һәм үлем өсөн бер ниндәй ҙә дауа юҡ, шуға ла ошо ике арауыҡта кинәнеп йәшәп ҡалығыҙ.

**(Сантаяна).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ батша үҙенең дәүләтендәге иң яҡын, иң талантлы, иң ышаныслы кешеләре менән һөйләшеп тора икән. Батшаның уйламаҫтан ҡапыл ғына ниҙер эшләй торған холҡо булған. Был юлы ла ул үҙе эргәһендә баҫып торған иң аҡыллы вәзиренә һуғып ебәргән. Вәзире бер нисә секунд тын ғына торған да, әйләнеп, үҙенең эргәһендә баҫып торған икенсе кешегә һуғып ебәргән. Ул һуҡҡан кеше был дәүләттәге министрҙарҙың береһе булған. Министр аптырап ҡалған. Ләкин оҙаҡ уйлап тормаҫтан, ул да йоҙроҡтары менән эргәһендәге кешенең ҡолаҡ төбөнә еппәргән. Шулай итеп, батшаның сәйер ҡылығын ҡабатлап, һәр кем эргәһендәге кешенең яңағына сәпәп сыҡҡан. Сәпәшеү батша һарайынан сығып, бар батшалыҡты урап сыҡҡан. Ә төнөн батшаны ҡатынының йоҙрого уятҡан. "Һин ни эшләйһең?"- тип аптыраған батша. "Мин ни эшләгәнемде, ғөмүмән, дәүләтебеҙҙә ни булғанын үҙем дә аңламайым, - тигән ҡатыны. - Ләкин йоҙроҡ менән дөмбәсләшеү бар илде урап сыҡты, тиҙәр. Бына мине һинең беренсе ҡатының дөмбәсләп сыҡты, минән өлкән булғас, уға ҡайтарып һуға алманым. Һинән башҡа минең һуғыр кешем юҡ..." - тигән ҡатын. "Ҡара әле, яңылыш ҡына йоҙроҡто эшкә еккәйнем, йоҙроғом үҙемә ҡайтты..." - тип аптыраған батша".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририят:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 7918
Заказ 1047